Кешенең һәр тырышлығы бүләкләнә. Һәр сәселгән орлоҡ - бер тоҡ иген, һәр идея - күп идея, һәр күрһәтелгән ышаныс - күптәрҙең ышанысын, һәр түҙемлек һәм аңлау - шулай уҡ аңлау булып үҙеңә ҡайтасаҡ. Бына яҙҙың фиғеле: нисек сәскәнһең, шулай урып алырһың. Алдаҡ сәсәһең икән - алдаҡ йыяһың. Һаранлыҡ сәсһәң - фәҡирлек йыяһың, ялҡаулыҡ сәсһәң, әлбиттә, келәтең буш буласаҡ. Һинең аңыңа эләккән икеләнеү, ҡурҡыу һәм ышанмаусылыҡ орлоғо шуны уҡ шыттырып бирәсәк.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

30 МАЙ - 5 ИЮНЬ (ҺАБАНАЙ - ҺӨТАЙ)

2009 ЙЫЛ

№22 (336)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Бала бәхете өсөн күп кәрәкмәй:



яраткан ата-әсәһе һәм... үҙ өйө булһын

2

Имтихандар башланды...



Һөҙөмтәһе булһын хәйерле

4

Батырҙарыбыҙ беҙҙе һаҡлай,

беҙ уларҙы һаҡлайбыҙмы?



8-9

Бала сағым - ҡолон сағым,

йүгереп йөрөп уйнар сағым



12

ТВ программа

14


## БАЛАМА

Балам, балам, бал ғынам,
Шыйыҡ ҡына тал ғынам,
Бөтмәҫ мәшәҡәтең менән
Миңә барыбер ял ғынам.
Балам, һин балан ғынам,
Хуш-еҫле ялан ғынам.
Илаһаң - ярам ғынам,
Көлгәндә - дауам ғынам.
Балам, һин болан ғынам,
Донъямда болам ғынам,
Шаян, шуҡ ҡолон ғынам,
Йәнемдә ҡойон ғынам.
Бағымсым да, байлығым да,
Яҙмышым да һин, балам.
Тағы - минең ниндәйлекте
Күрһәтеп торор баһам.

Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.



ДИАЛОГ

# БАТЫРҘАРЫБЫҘ БЕҘҘЕ ҺАҠЛАЙ,

## беҙ уларҙы һаҡлайбыҙмы?

**Әгәр ҙә теге йәки был шәхес үҙ иле, халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылып, фиҙаҡәрлек өлгөһө кимәленә күтәрелә алһа, ул халҡының күңелендә лайыҡлы урын яулай, милли символ кимәленә күтәрелә. Ундай шәхестәрҙе башҡалар, реакцион ҡарашлы ойошмалар нисек кенә ҡараға буярға тырышмаһын, улар үҙ халҡына хеҙмәт итеүҙән туҡтамай. Киреһенсә, был осраҡта халыҡ үҙ милли батырын, шәхесен яҡларға тырышып уяна, әүҙем тормош позицияһына баҫа, йәғни милли символ кимәленә күтәрелгән шәхес, батыр һәр ваҡыт үҙ халҡының һағында. Һуңғы ваҡытта милли юлбашсыбыҙ Әхмәтзәки Вәлидигә бысраҡ яғырға тырышыу ҙа ижтимағи ойошмаларҙың эшен йәнләндереп ебәрҙе. Был йәһәттән милли батырыбыҙ Салауат шәхесе яҡлауға мохтажмы? Уның исемен мәңгеләштереү өсөн беҙ мөмкин булғандың барыһын да эшләнекме икән? Батырыбыҙҙың тыуыуына 255 йыл тулған**



**көндәрҙә республикабыҙ йәмәғәтселеге уның хаҡында ниндәй уйҙар менән йәшәй һуң? Ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында әңгәмәләшер өсөн беҙ филология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры Мирас Хәмзә улы ИҘЕЛБАЕВ менән Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Нәшриәт, матбуғат һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы вазифаһын башҡарыусы Фәнил Шәмсетдин улы ҠОҘАҠАЕВты редакцияға саҡырҙыҡ. Һүҙ - уларға.**


(Дауамы 8 - 9-сы биттәрҙә).


НИҺАЙӘТ!

## АУЫЛДАРҒА ҠАЙТЫҒЫҘ!

Хәҙер ауыл агросәнәғәт предприятиеларында эшләргә теләгән йәш белгестәр эш хаҡына айлыҡ өҫтәмә түләү менән файҙаланыу хоҡуғына ла эйә булды. Башҡортостан Республикаһы Президенты ошо туралағы Указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, юғары уҡыу йорто тамамлаған белгестәргә - 7 мең, урта һөнәри белемлеләргә 4 мең һум күләмендә айлыҡ өҫтәмә түләү ҡаралған. Был аҡса белгескә предприятиенан алған эш хаҡына ҡушып, өс йыл дауамында биреләсәк. Документта шулай уҡ торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеү өсөн бер тапҡыр түләнә торған пособиелар ҙа билдәләнгән: юғары белемлеләргә - 100 мең, урта махсус уҡыу йорто тамамлағандарға - 60 мең һум. Был аҡсаға республикала йылына 250 мең кеше дәғүә итә ала.



ИҒТИБАР!

## "Киске Өфө" сайтына рәхим итегеҙ!

Башҡорт телендәге аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзите интернетта үҙенең сайтын асты: **www.kiskeufa.ru**. Сайтҡа инеп, баҫманың һәр яңы һаны менән таныша, төрлө конкурстарыбыҙ тураһында мәғлүмәт ала алаһығыҙ. Меңәрләгән матбуғат баҫмалары баҙарында үҙ урыны, үҙ йөҙө, үҙ һүҙе менән айырылып торған "Киске Өфө" гәзитен уҡығыҙ, уның хаҡындағы мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге милләттәштәргә лә еткерегеҙ. Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!

**✓ Ҡайһы бер эксперттар белдереүенсә, демографик хәл шул көйө ҡалған хәлдә 2050 йылға тиклем әле 140 миллионлы Рәсәй халҡы 100 миллионға тиклем кәмейәсәк.**



ИШАРА

# БАЛА БӘХЕТЕ ӨСӨН КҮП КӘРӘКМӘЙ:

## ятаҡан ата-әсәһе һәм... үҙ өйө булһын

**Ер йөҙөндә кеше өсөн бала бағыуҙан да ғәмлерәк вә йәмлерәк башҡа берәй шөғөл бармы икән? Дөрөҫөн әйткәндә, йәшәйешебеҙҙең асылын бала табып, тәрбиәләп үҫтереүҙән башҡа аңлап та булмайҙыр. Кешегә лә бала табыу мөмкинлеге бөйөк тәбиғәттән, йәғни Хоҙайҙың үҙенән бирелгән. Әйтергә кәрәк, кешелек тарихында бала табырға теләмәү йәиһә уны билдәле бер юлдар менән сикләү ғәмәлдәре булмаған. Боронғо Библия китабында ла Аллаһы Тәғәләнең Әҙәм балаларына: "Үрсегеҙ һәм артығыҙ!" - тип бойороуы тураһында әйтелә. Ҡөрьән-Кәрим шулай уҡ мосолман халҡының ишәйеүен хуп күрә. Заманында һәр яралған баланың тәбиғи рәүештә донъяға килеүе һис боҙолмай торған тормош ҡануны булған. Шулай булмаһа, кешелек яҙмышының ҡыл өҫтөндә ҡалған мәлдәре күп булыр ине: тәрлө тәбиғәт стихиялары, аслыҡ, йогошло сирҙәр, һуғыштар һөҙөмтәһендә әҙәм балаларының күпләп ҡырылып, бөтөнләй аҙайып ҡалған саҡтары ла булған бит. Шуғалыр ҙа инде, барлыҡ донъя диндәрендә әсә ҡарынында яралған баланы юҡ итеү тыйылып, бындай ғәмәл оло гонаһҡа тиңләнгән.**

Беҙ, хәҙерге заман кешеләре, бөтөнләй икенсе донъяла көн итәбеҙ. Кеше ер йөҙөндә иркен һәм етеш йәшәй алһын өсөн быға саҡ күрелмәгән мөмкинлектәр асылды. Ваҡ һуғыштар әле-нән-әле булып торһа ла, эре ҡыйралыштарға юл ҡуйылмай. Медицина фәне һәм табиптарҙың һаулыҡ һаҡлау эшмәкәрлеге шул тиклем алға китте, күп сирҙәргә дауа табылды, кеше ғүмерен оҙайта алыу өсөн яңынан-яңы мөмкинлектәр табылып тора. Агрономия, биологик технологиялар кешелекте аҙыҡ-түлек менән бер өҙлөкһөҙ тәьмин итә алыу кимәленә алып килде. Фән, техника, яңы асыштар кеше мәнфәғәтенә йүнәлтелә бөгөн. Уйлап ҡараһаң, күп илдәрҙә ишле ғаиләләргә йәшәү шарттары яҡшырғандан-яҡшыра бара һымаҡ. Тик тормошобоҙ ни өсөндөр бөтөнләй икенсе йүнәлештән китеп бара: иң алға киткән илдәрҙә лә күпселек ғаиләләр аҙ һанлыға әйләнде. Бер генә балалы булып ҡалған ғаиләләр бихисап, бик һирәктәр ике бала баға, ә өс һәм унан да күберәк бала тәрбиәләүсе ата-әсәләргә тирә-йүндәгеләр хатта ғәжәпләнеберәк ҡарай башланы. Донъяның 86 дәүләтендә тыуым халыҡ һанын арттырыу түгел, ә кәметмәй тотоу өсөн дә етерлек кимәлгә етмәй. Европа ҡартая, ә икһеҙ-сикһеҙ киңлектәре менән дан тотҡан Рәсәйҙә халыҡ һаны йылдан-йыл аҙая бара. Ҡайһы бер эксперттар белдереүенсә, демографик хәл шул көйө ҡалған хәлдә 2050 йылға тиклем әле 140 миллионлы Рәсәй халҡы 100 миллионға тиклем кәмейәсәк.

Ни өсөн хәҙерге цивилизациялы илдәрҙә йәшәүселәр бер нисә бала бағыуҙан баш тарта? Әлбиттә, демографик көрсөктөң һәр айырым илгә хас булған үҙ сәбәптәре барҙыр. Әммә бына нимә иғтибарҙы йәлеп итә: бай һәм алға киткән илдәрҙә лә байтаҡ ғаиләләр иң күбендә 2 генә бала табыуҙы хуп күрә. Бының төп сәбәбе хәҙерге заман ҡулланыусылар йәмғиәтендә һәр айырым шәхестең бер ни менән дә сикләнмәгән культы барлыҡҡа килеүендәлер. "Кеше иң элек үҙе хаҡында ҡайғыртырға тейеш!" - социаль эгоизм нығ үҫешкән илдәрҙә күптәр ошо девизға ярашлы йәшәүҙе хуп күрә. Ә бала табыу, уны ҡарап-ҡурсалап үҫтереү, матди сығымдарҙан башҡа һәр атаәсәнән үҙ ваҡытын, көсөн, аҡылын, хис-тойғоларын һис йәлләмәйенсә бала-сағаһы менән ихлас бүлешә алыуҙы талап итә. Ишле балалы ғаиләлә, теләһәң-теләмәһәң дә, үҙең өсөн генә йәшәй алмаясаҡһың. Әлбиттә, үҙ-үҙең генә ҡарап, үҙ ихтыяждарын мөмкин тиклем тулыраҡ ҡәнәғәтләндерергә күнеккән эгоистар цивилизацияһында күп балалы ғаиләгә урын ҡалмай.Шуныһы ҡыуаныслы: нисек кенә булмаһын, әлегә беҙ Рәсәйҙә сиктән сыҡҡан индивидуализм сәскә атҡан ил, тип әйтә алмайбыҙ. Халыҡ бала бағыуҙы иң изге ғәмәл сифатында баһалай әлегә. Икенсегә, өсөнсөгә бала табыу тураһында өмөт иткәндәр ҙә бихисап.

Тик ни өсөн илебеҙ демографик көсһөҙлөк һаҙлығынан сыға алмай ыҙалана һуң? Путиндың әсәлек капиталы ла һиҙелерлек алға китеш сараһы була алманы. Бында айырым бер уникаль сәбәп эҙләп йөҙөргә кәрәкмәй: совет осоронда уҡ башланған дөйөм көрсөк, бөтә дәүләт ҡоролошо менән бергә ижтимағи һәм әхлаҡи таяныстарҙы ла емереп ташлап, ғаилә институтына ла бер ни менән дә аҡлап булмаҫтай зыян килтерҙе. Иртәгәһе көнгә ышанысы юғалған кешеләр өсөн тағы ла бер бала табыу бойомға ашмаҫ хыял ғына булып ҡаласаҡ. Иҡтисади етешһеҙлек осоронда ғаилә үҙе лә тотороҡһоҙ хәлгә килде: айырылышыусылар һаны ил буйынса теркәлгән никахтарҙың яртыһын тиерлек тәшкил итә бөгөн. Ә тотороҡһоҙ ғаиләләр өсөн бала артыҡ бер бәлә генә булып тора.



Эйе, бала табыу - һәр ғаиләнең үҙ ҡарамағындағы мәсьәлә. Ил буйынса миллионлаған балаларҙың ата-әсәһе була тороп та, етемлек һурпаһын татыуын оноторға ярамай. Тыуырға тейеш булып та абортсы табип инструментынан ҡотола алмағандар менән хәҙерге етемдәр - бер хурлыҡлы миҙалдың ике яғы ул. Был ике күренеш йәмғиәтебеҙҙә кешелеклелек тойғоһоноң иҫ киткес кимәлдә бөскәреүе һөҙөмтәһе. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Рәсәй тарихында ябай кеше бары ил элиталарының маҡсаттарын ғәмәлгә ашырыу өсөн кәрәк булған тере материал сифатында ҡарала килде. Элек нисек ине, хәҙер ҙә шулай. Хатта ҡай сағында батша Рәсәйендә, күпселек халыҡтың ирке сикләнгән булыуына ҡарамаҫтан, кешене йәлләү тойғоһо көслөрәк булғандай тойола миңә. Ә бына Совет дәүләтендә, иң бәхетле тормош төҙөүселәр илендә, айырым кеше яҙмышының яҡты киләсәк өсөн бер һүҙһеҙ ҡорбан ителергә тейешлеге төп ҡанунға әйләнеп өлгөргәйне инде. Уйлаһаң, уйылып китерлек: миллионлаған бала бәхетле киләсәк хаҡына етемлеккә дусар ителә...

Хәлдәребеҙ бөгөн дә һис маҡтанырлыҡ түгел. Бер яҡтан, ярлылыҡ балаларыбыҙҙы физик яҡтан көслө һәм таҙа итеп тәрбиәләргә мөмкинлек бирмәһә, икенсе яҡтан, рухи төшөнкөлөк ҡалҡынырға ирек бирмәй. Дәүләт кешене һаман да иң элгәре ниндәйҙер файҙа, төшөм алыу сығанағы итеп ҡарауын дауам итә. Социализм тип аталған дәүләт империализмы урынына олигархтар һәм чиновниктар хакимлыҡ иткән яңы ҡоролош төҙөлдө. Эйе, дәүләт етәкселәре тыуымдың кәмеүе айҡанлы борсолоуын белдереп тора тороуын. Тик улар, пенсионерҙарҙы ашатыр өсөн кем аҡса эшләп икән яҡын киләсәктә, тип күберәк ҡайғыра. Үҙенә бер генә (!) бүлмәле фатир алырлыҡ та аҡса эшләй алмаған йәш ғаиләләр бала табып, уны ҡайҙа ҡарарға тейеш һуң? Рәсәйҙә, төҙөлөш материалдары (ағасы булһынмы, ҡомо, балсығы һ.б. кәрәкле нәмәләреме) ишелеп ятҡан илдә, әҙәм балалары иҫ киткес тығыҙлыҡта көн итеүен дауам итә. "В тесноте, да не в обиде" кеүек урыҫ әйтеме махсус рәүештә Рәсәй кешеһе өсөн уйлап сығарылған кеүек. Әгәр илебеҙҙә бюрократик закондар һәм улар һағында тоғро эт кеүек тороусы чиновниктар булмаһа, фатир ҡытлығы күптән бөткән булыр ине. Беҙҙәге байлыҡ бүтән илдәрҙә булһа ине! Бына бар территорияһын тигәндәй ҡом сүллектәре биләгән Берләштерелгән Ғәрәп Әмирлектәре нефть һатып ҡына ла күптән инде коммунизмдағы һымаҡ йәшәй һәм арттан аҡсаһын киләсәк быуындар фондына һалып тора.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Индонезия Республикаһының Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Хәмид Авалудин менән осрашты. Өфөгә илсе "Газ. Нефть. Технологиялар -2009" Халыҡара махсуслаштырылған күргәҙмәһендә ҡатнашыусы Индонезия дипломатик делегацияһы менән бергә килгән. Дипломат билдәләүенсә, Башҡортостан менән Индонезия нефть һәм газ эшкәртеү өлкәһендә уңышлы хеҙмәттәшлек итә алыр ине. Әле беҙҙең илдәр араһындағы тауар әйләнеше 612,8 мең долларлыҡ тәшкил итә.

✓Мәскәүҙә үткән "Студенттар ирекле эшҡыуарлыҡта" тигән Халыҡара конкурстың Бөтә Рәсәй этабында БДУ-ның Сибай институты һәм Стәрлетамаҡ филиалдары студенттары командалары ҡатнашты. Былтыр Сибай командаһы был конкурста беренсе урын яулап, Сингапурҙа үткән халыҡ-ара этапта Рәсәй исеменән сығыш яһап ҡайтҡайны.

✓Һамар өлкәһендә үткән "Шифахана -2009" Бөтә Рәсәй форумында "Янғантау" шифаханаһы өс алтын миҙалға һәм "Рәсәйҙең иң яҡшы шифаханаһы" тигән дипломға лайыҡ булды. Шулай уҡ "Красноусол", "Йәшел сауҡалыҡ", "Йоматау", "Танып", "Асы", "Яҡтыкүл" курорттары ла айырым номинацияларҙа алтын һәм көмөш миҙалдар менән бүләкләнде.

✓Башҡорт дәүләт педагогия университетында яҙыусы Камил Йыһаншин һәм университеттың Мәҙәниәт үҙәге башланғысы менән "Өфө һыуһары" тигән студенттар премияһы булдырылды. Премия фән һәм сәнғәт өлкәһендәге ижади уңыштары өсөн студенттарға, магистранттарға һәм аспиранттарға биреләсәк.

✓"Салауат Юлаев" командаһына Ярославлдең "Локомотив" командаһы һаҡсыһы Илья Горохов килде, ә юлаевсы Владимир Воробьев команда менән контрактын тағы ике йылға оҙайтты.

✓Республикабыҙҙа балалар музыка һәм сәнғәт мәктәбе тәрбиәләнеүселәре ҡатнашлығында "Алтын даға" фольклор конкурс-фестивале булып үтте. Тәүге тапҡыр үткән был бәйгелә 47 музыка һәм сәнғәт мәктәбенән 700-ләп бала ҡатнашты. Жюри 130-ҙан ашыу сығышты ҡарап, иң талантлы балаларҙы билдәләне.

Нефть менән газға беҙ ҙә байбыҙ ҙа һуң, тик ул байлыҡтың үҙ хужалары бар. Ә байҙарҙа ҡасан фатирһыҙ фәҡир ҡайғыһы булһын, уларҙың үҙ "ҡайғылары" баштан ашҡан... Хатта нефть һатыуҙан тупланған дәүләт миллиардтары ла шул уҡ банкыларҙың ҡомағай "таш ҡорһаҡтарына" инеп, эҙһеҙ юғалып тор а. Бер кем дә ошо миллиард долларҙарҙы халыҡҡа таратып биреүҙе талап итмәне бит, тик ошо миллиардтарҙың өстән бер өлөшөн генә лә социаль торлаҡ төҙөүгә тотонғанда, дәүләтебеҙҙе, тап Конституциябыҙҙағы һымаҡ, социаль дәүләт тип атай алыр инек.

Электән үк "Бер этажлы Англия" йәиһә "Ике этажлы Америка" тигән төшөнсәләр менән таныш инек: сит ил кешеләре күп этажлы өйҙәрҙә йәшәүҙе хушһынмай, үҙ өйҙәрендә, ҡаланан ситтә төҙөлгән торлаҡты хуп күрә икән. 90-сы йылдарҙа Һупайлылағы башҡорт лицейына бер төркөм Америка студенттары килеп төштө. Улар бер үк төрлө 9 этажлы блоклы өйҙәрҙе тамаша ҡылып, сикһеҙ ғәжәпләнеп, былай тип һораны беҙҙән: "Ни өсөн һеҙҙә шул тиклем күп итеп ваҡытлы өйҙәр һалалар?" Баҡһаң, бындай өйҙәрҙә Америкала фәҡирҙәр, гастарбайтерҙар һәм бомждар ғына йәшәй икән. Эх, америкалылар, ошо "бомжатниктар" бушҡа бирелгәс, нисек шатланғаныбыҙҙы күрһәгеҙ, телдән дә ҡалыр инегеҙ, бәлки.

Мин әлегерәк Өфөгә яҡын ерҙәрҙә бәләкәй этажлы ҡасабалар һалынмауына аптырай торған инем, сөнки байтаҡ халыҡты тап ошо юл менән фатирлы итеп була бит. Ниһайәт, Башҡортостан Хөкүмәте торлаҡҡа мохтаж булғандар, бигерәк тә йәш ғаиләләр өсөн Өфөнән алыҫ булмаған урындарҙа ер бүлеп, ярайһы уҡ осһоҙ хаҡҡа айырым йорттар һалыу эшен башлап ебәрҙе. Был башланғыс дауамлы булыр һәм бик күп ғаиләләрҙе торлаҡлы итеп, бала бағыу бәхетен татырға мөмкинлек бирер, тип уйларға кәрәк. Бала бәхете өсөн әллә ни күп нәмә кәрәкмәй ул: ятраҡан ата-әсәһе, мәктәптән йүгереп ҡайтып керер үҙ өйө, өҫтө бөтөн, тамағы туҡ булһа, уның йөҙөнән шатлыҡ һирпелеп торор. Иншалла, шулай була күрһен!

**Вәли ИҘРИСОВ.**

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# БАШ ЭШЕ МӨҺИМЕРӘК,

## йәки Ни өсөн чиновниктарға телен тыйырға, ә профсоюздарға аҡылға ултырырға ҡушылды?

Йәмәғәт, шым! Көрсөк хаҡында өндәшмә! Көрсөк, тип ауыҙыңды асаһы булма! Ләм-мим! Ҡасан тамамлана ул, нисек тамамлана, тамамланамы - унда беҙҙең эш юҡ. Белмәйбеҙ. Һәм белергә лә те-ләмәйбеҙ. Көрсөк үҙ юлы менән - беҙ үҙ юлыбыҙ менән. Теләһә нишләһендәр. Ни өсөн тиһегеҙме? Ярамай! Аңламағандар өсөн ижекләп ҡабатлайым. Я-ра-май! Булды. Бөттө. Илдә һүҙ ирке бөттө. Бар кеше өсөн түгел, әлбиттә. Һайлап алынғандар өсөн генә. Һәм ҡайһы бер темалар буйынса ғына. Әйтәйек, секс тураһында һөйләргә, яҙырға, күрһәтергә мөмкин. Төрлө янғындар һәм яндырыусылар, енәйәттәр һәм енәйәтселәр, үлтереүҙәр һәм үлтереүселәр, көсләүҙәр һәм маньяктар хаҡында һөйләргә теләйһегеҙме? Рәхим итегеҙ. Бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ юҡ. Былай ҙа бит телеэкрандар ошо һәм башҡа төрлө темалар менән лыҡа тулы. Әммә, йәмәғәт, ҡайһы бер темалар хаҡында ауыҙ асырға ла ярамай. Мәҫәлән, көрсөк. Эйе, бөтә донъяны баҫып алған иҡтисади көрсөк тураһында һөйләү хәҙер тыйылды. Иң юғарынан - Рәсәй Президенты Дмитрий Анатольевич Медведев ауыҙынан сыҡты был хәбәр. Үткән аҙнала Рәсәй эшҡыуарҙары көнө уңайы менән илебеҙҙең йүнселдәре менән осрашҡанда яңғыраны ул. Эшҡыуарҙарҙың береһе Президентҡа һүҙ ҡушып, күсемһеҙ милеккә хаҡтар төшөү тураһында шау-шыу ҡуптарған ваҡытлы матбуғат сараларына һәм төрлө прогноздар менән сығыш яһаған чиновниктарға зарланды. Быға яуап итеп, Дмитрий Анатольевич, ваҡытлы матбуғат сараларына һүҙем юҡ, ә бына ҡайһы бер хөкүмәт ағзаларының Рәсәй илле йыл буйына көрсөктән сыҡмай, тип белдереүҙәрен ҡабул итә алмайым. Улай тип иҫәпләһәң, ана бара юлың, тип ҡәтғи белдереү яһаны. Ул чиновниктарға "телдәрен тыйырға" тәҡдим итте һәм уйлап еткерелмәгән иҡтисади фараздар менән сығыш яһамаҫҡа тәҡдим итте.

Ысынлап та, чиновниктар тамам шашты шул. Әллә уларға телекамералар һәм журналистарҙың диктофондары ҡуҙғытҡыс һымағыраҡ тәьҫир итәме шул? Һуңғы арала уларҙың бар эштәре - көрсөктө анализлау. Ҡасан башланған ул? Нисек дауам итә? Көрсөктөң ҡайһы этаптары үтеп китте? Ә ҡайһыларын көтөргә кәрәк? Был көрсөк Америка Ҡушма Штаттарында уҙған быуаттың 20-30-сы йылдарында булған Бөйөк депрессияға оҡшағанмы? Оҡшаһа, нимәһе менән? Ә 2009 йылғы көрсөк 1998 йылғы көрсөктән ҡайһы урыны менән айырыла? Юғары урындарҙағы түрәләребеҙ, министрҙар, уларҙың урынбаҫарҙары, төрлө кимәлдәге һәм рангтағы чиновниктар көн һайын ошо һәм тағы ла башҡа бик күп һорауҙарға яуап эҙләй. Үҙ алдына ғына, кабинеттарына бикләнеп ултырып түгел, ә ваҡытлы матбуғат саралары вәкилдәренә сығып тороп баш вата улар. Түрәләребеҙҙе тағы ла бер нисә мәсьәлә ҡыҙыҡһындыра - көрсөк ҡасан тамамланасаҡ? Һәм әлеге ваҡытта уның ниндәй этабы бара? Йәғни, чиновниктар теле менән әйткәндә, көрсөктөң төбөнә төштөкмө беҙ, әллә юҡмы?

Ошо урында көрсөк (иҡтисади төшөнсә генә) күҙ алдыма төпһөҙ бер упҡын булып килеп баҫа. Бер яҡтан уйлап ҡараһаң, ул упҡындың төбөнә төшкәс, ҡабат өҫкә күтәрелеү башланырға тейеш бит. Ә икенсе яҡтан иһә, упҡын төбөнә ниндәй хәлдә барып төшәһең бит. Имен-аман ғына булһа, ярай ҙа ул. Ә аяҡ-ҡулың, умыртҡа һөйәктәрең селпәрәмә килһә? Иҡтисади терминология менән әйткәндә, илдең сәнәғәте, банк системаһы юҡҡа сыҡһа? Беҙҙекеләр ул хаҡта уйламай бит. Улар өсөн иң мөһиме, төпкә төштөкмө беҙ, әллә юҡмы? Үткән аҙнала, мәҫәлән, Рәсәй финанс министры урынбаҫары Оксана Сергиенко әйтеүенсә, көрсөк осоронда тәүге тапҡыр Рәсәйгә капитал ағыла башлаған. Тимәк, төптән өҫкә күтәреләбеҙ, тигән һүҙ был. Ә иҡтисади үҫеш министры урынбаҫары һүҙҙәренә ҡарағанда, Рәсәй иҡтисадының ҡолау темптары әле саҡ яйлай ғына башлаған. Кемгә ышанырға? Ә сәнәғәт һәм сауҙа министры Виктор Христенко иһә махсус рәүештә (төрлө иҡтисади эксперттарҙың, кәңәш биреүсе структураларҙың реакцияһын тикшерер өсөн, йәнәһе) ялған фараздар менән сығыш яһауын йәшермәне лә.

Юҡ, йәмәғәт, кемгә нисектер, әммә миңә Президентыбыҙ көндән-көн нығыраҡ оҡшай. Уның түрәләрҙе тыйып ҡуйыуын илебеҙҙә көрсөк менән көрәшеү планының айырылғыһыҙ бер өлөшө тип баһаларға кәрәк. Көрсөк биш йылданмы, ун биш йылданмы, әллә илле йылдан бөтәме, тип фараз ҡылыуҙан мәхрүм ителгән министрҙар, бәлки, хәҙер үҙҙәренең төп эштәренә, йәғни, иктисад, финанс һәм сәнәғәт менән идара итергә тотонор, ә?

Миңә Премьер-министр Владимир Владимирович Путиндың эшмәкәрлеге ле уғата ныҡ оҡшай башланы. Ул да бит үткән аҙнала буш ҡалманы. Ул да ташҡа баҫып, һәр бер мөйөшкә элеп ҡуйырлыҡ, ятлап алып, ҡабатлап йөрөрлөк белдереүҙәр менән сығыш яһаны. Аныҡлабыраҡ үтәйек, булмаһа. Дмитрий Анатольевич эшҡыуарҙар менән осрашҡан мәлдә Владимир Владимирович профсоюздар менән әңгәмәләште. Ябай итеп әйткәндә, бер үк ваҡытта Президент эш биреүселәрҙе, ә Премьер-министр эшселәрҙең вәкилдәрен тыңлаған булып сыҡты. Тағы ла ҡайһы илдә етәкселек шулайтып йәмғиәттең бер юлы ике полюсын ҡулында тота ала әле, ә? Ярай, образдарҙан аныҡ мәғлүмәттәргә күсәйек. Үткән аҙнала Мәскәүҙә дөйөм Рәсәй профсоюздарының урындағы ойошмалары рәйестәренең Бөтә Рәсәй кәңәшмәһе булып үтте. Илебеҙ предприятиелары һәм ойошмаларынан килгән делегаттар форсат менән файҙаланып, урындағы халыҡтың, ябай эшселәрҙең аһ-зарын етәкселеккә еткерергә тырышты. Байкал целлюлоза-ҡағыҙ комбинаты профсоюзы башлығы һүҙҙәренә ҡарағанда, комбинатта эш хаҡы буйынса бурыс 100 миллион һумға барып еткән. Ә Кузбасс күмер шахталарында йыл башынан 13 мең ярым кеше эшһеҙ ҡалған. Тағы ла 30 мең эшсе бына-бына урамға сығарып ташланасаҡ. Ошо шарттарҙа эшселәр ни ҡылырға тейеш һуң? Социализм заманынан бер тезис иҫкә төшә - "Һуйырташ - пролетариаттың төп ҡоралы". Һәм тағы ла - "Пролетариаттың сылбырҙарынан башҡа юғалтыр бер нәмәһе лә юҡ". Ысынлап та, көрсөк артабан да тәрәнәйһә, ул бит иң тәүҙә ҡара ыуылдырыҡтан ҡыҙылына күсеүҙе "көрсөк" тип баһалағандарға түгел, ә ябай эшселәрҙең бәкәленә һуғасаҡ. Профсоюздар иһә - эшселәрҙең вәкилдәре булараҡ, уларҙың мәнфәғәттәрен яҡларға тейеш. Нисек итепме? Кем нисек инде. Кемдер зарлана. Кемдер ялыу яҙа. Ә кемдер плакаттар яҙып, лозунгылар әҙерләп, урамға сығырға өндәй. Ә унан инде... Тарихты хәтерләйһегеҙме? 100 йыл элек 8 сәғәтлек эш көнө, эш хаҡын арттырыу кеүек иҡтисади талаптар менән ойошторолған стачкалар һәм забастовкалар тиҙ арала сәйәси акцияларға әүерелә. Батша хөкүмәтен түңкәреү, власты - Советтарға, ерҙе - крәҫтиәндәргә, завод-фабрикаларҙы эшсе халыҡҡа биреү тураһындағы лозунгылар илде ҡаҡшата. Беҙҙе лә ошо көтәме? Заманалар башҡа, тиерһегеҙ, моғайын. Ә бит 1990 йылдар башында ғына шахтерҙар Мәскәүҙә каскалары менән асфальт төйөп ултырҙы бит.

Шуға ла Премьер-министрыбыҙ профсоюздар менән осрашыуҙы үҙенең изге бурысы тип һананы, шикелле. Уның сығышындағы ҡайһы бер һүҙҙәр ошо фекерҙе ҡеүәтләп кенә тора. Ҡасандыр пролетариаттың төп ҡоралы - һуйырташ, тип әйтә торғайнылар. Бөгөн улай түгел. Бөгөн пролетариаттың төп ҡоралы - уның башы, тине Премьер-министр. Ул эшселәргә ыңғай үҙгәрештәрҙе көтөп ятмаҫҡа, илде, өлкәне йәки предприятиены тупикҡа индермәҫкә, ә, кирәһенсә, хәлде яҡшыртыу өсөн барыһын да эшләргә кәрәк, тип белдерҙе. Эшселәр эшләргә ҡаршы түгел дә ул, тик эш кенә юҡ бит. Әммә был хаҡта Премьер-министрға әйтергә баҙнат итеүсе табылманы.

**Шулай итеп, үткән аҙнала, бер көн эсендә генә, дәүләтебеҙҙең етәкселәре "көрсөк менән көрәш фронты"нда бер юлы ике әһәмиәтле еңеүгә өлгәште. Беренсенән, Президент хөкүмәт ағзаларының ауыҙын япты. Ә бит логика буйынса, көрсөк хаҡында һөйләмәһәң, ул мотлаҡ юҡҡа сыға. Икенсенән, Премьер-министр профсоюздар менән аралашып, эшселәрҙе аҡылға ултыртты. Йәғни, уларға урамға сығырға, ҡулдарына пролетариат ҡоралын алырға форсат ҡалманы. Бөгөн бит пролетарҙың ҡоралы башҡа.**

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Указына ярашлы, республика ҡала һәм районларында һабантуйҙар графигы раҫланды. 30 майҙа байрам Архангел, Баймаҡ, Бүҙәк, Дәүләкән, Дүртөйлө, Күгәрсен, Нуриман райондарында һәм Октябрьский ҡалаһында үтә. 6 июндә Әбйәлил, Асҡын, Ауырғазы, Баҡалы, Белорет, Благовар, Благовещен, Йәрмәкәй, Ейәнсура, Йылайыр, Илеш, Ҡалтасы, Ҡырмыҫҡалы, Краснокама, Көйөргәҙе, Мәләүез, Мәсетле, Миәкә, Стәрлетамаҡ, Тәтешле, Туймазы, Өфө, Хәйбулла, Саҡмағош, Шишмә, Шаран райондары халҡы өсөн һабантуй ойошторбласаҡ. 7 июндә - Бөрйәндә, 10 июндә -Борайҙа, 12 июндә - Бәләбәй, Ғафури, Ҡариҙел райондарында, Өфө һәм Нефтекама ҡалаларында байрамдар гөрләйәсәк. 13 июндә Балтас, Балаҡатай, Бөрө, Дыуан, Ишембай, Ҡыйғы, Кушнаренко, Мишкә, Стәрлебаш, Учалы, Федоровка һәм Яңауыл райондарында, ә 20 июндә Салауат районында һабантуйҙар үтәсәк.

✓Белгестәр Өфөләге архитектура ҡоролмаларына паспорт бирергә йыйына. Әлегә уларҙың 25-е генә теркәлеү үтәсәк. Был паспорт дәүләт тарафынан яҡлауҙы күҙ уңында тотҡан "һаҡлау грамотаһы" сифатында буласаҡ.

✓Киров районында "Репродуктив һаулыҡты һаҡлау проблемалары" тип аталған фәнни-ғәмәли конференция үтте. Унда Өфө ҡалаһынан ғына түгел, ә Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан да, атап әйткәндә, Һарытауҙан, Түбәнге Новгородтан, Екатеринбургтан белгестәр һәм фән эшмәкәрҙәре килгәйне.

✓1 июндә 17 сәғәттә Киров районы хакимиәтенең туранан-тура ҡатнашлығы менән "Латифа" исемле Беренсе башҡорт балалар художество студияһы асыла. Уның төп маҡсаты - көнкүреш художество әйберҙәре сәнғәтендә, ғөмүмән, башҡорт живопись мәтәбендә башҡорт халҡының мәҙәни һәм тарихи тамырҙарын өйрәнеү. Телефон: 8-917-421-6313.

✓5 июндә БР Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте һәм идараһы академияһы БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының Халыҡты эш менән тәьмин итеү идаралығы менән берлектә ойошторолған һөнәр һайлау, эш табыу мәсьәләренә арналған сара үткәрә.

✓29-30 майҙа Октябрьскийҙа Республка Ҡурай байрамы үтә.

✓ ***БДИ һөҙөмтәләре эшкәртелгәндән һуң сығарылыш уҡыусыларына улар тарафынан тупланған балдар күрһәтелгән сертификат тапшырыла. Иң күп йыйырға мөмкин булғаны - 100 балл.***



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШ ҠАЛА

## байрамға әҙерләнә...

**Өфө ҡала хакимиәте башлығы янындағы сираттағы ултырышта Рәсәй көнө, Өфө ҡалғаһына нигеҙ һалыныуға 435 һәм Салауат Юлаевтың тыуыуына 255 йыл тулыуға арналған саралар планы ҡаралды.**

Байрам саралары 11 июндә Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыу менән асыла. 12 июндә Салауат Юлаевтың тыуыуына 255 йыл тулыуға арналған театрлаштырылған байрам шулай милли батырҙың һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башланасаҡ. Һәйкәл алдындағы майҙанда ҡаланың ете районы ете тирмә ҡорасаҡ. Ҡунаҡтарҙы төньяҡ амурҙары һәм гусарҙар формаһындағы артистар һәм ҡурайсылар ансамблдәре ҡаршылаясаҡ. Унда Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, Учалы, Стәрлетамаҡ һәм Сибай филармониялары, "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле артистары ҡатнашлығындағы вокаль-хореографик композиция башҡарыласаҡ.

12 июндә үтәсәк спорт ярыштары өсөн Конгресс-холл артындағы спорт майҙаны һайланған. Бынан тыш, Дуҫлыҡ монументында, "Ҡашҡаҙан" паркында ла төрлө ярыштар үтәсәк.

12 июнь Ленин исемендәге майҙанда "Мин яратам һине, баш ҡалам!" тип аталған байрам сараһын 18 сәғәттә "Студент осрашыуҙары" фестиваленең Гала-концерты аса. Унан һуң билдәле артистар һәм коллективтар сығышы, "Электройәй" электрон музыка фестивале көтөлә. Байрам фейерверкына тиклем башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары сараны дауам итәсәк. Фейерверк "Моторҙар төҙөү" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда ла буласаҡ.

## ...таҙарына

**Май аҙағына тиклем баш ҡалала бөтә урамдар һәм торлаҡ кварталдары тәртипкә килтереләсәк.**

Ҡалала экологик акция иғлан итеү менән һәр аҙна һайын санитар йомалар үткәрелә. Дөйөм ҡала өмәләрендә яҡынса 28 мең кеше ҡатнашҡан, улар 2,3 мең кубометр самаһы сүп-сар йыйған. 6 апрелдән 23 майға тиклем торлаҡ йорттар яны территорияларынан 43 мең кубометр көнкүреш ҡалдыҡтары сығарылған, был күрһәткес, былтырғы менән сағыштырғанда, 40 процентҡа кәмерәк. Был ҡыш ҡарҙың күп яумауы һәм торлаҡ йорттар янында 127 биш кублы контейнерҙар ҡуйыу менән бәйле, ти белгестәр. Өмәләр ваҡытында яҡынса 5 мең ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған, 187 сәскә түтәле һәм "альп тауы" яһалған.

Микрорайондарҙа тәртип һәм таҙалыҡ урынлаштырыу менән бөгөн 1,2 мең урам һепереүсе шөғөлләнә, уларға көн һайын ярҙамға мең ярым самаһы торлаҡ хужалыҡтары хеҙмәткәрҙәре сыға.

УРА!

# ИМТИХАНДАР БАШЛАНДЫ...

## Һөҙөмтәһе булһын хәйерле

**Илдең бөтә мәктәптәрендә лә һуңғы ҡыңғырауҙар шылтыраны инде. Мәктәпте тамамлаясаҡ балаларға ошо уңайҙан бер аҙ ғына иркен тын алып, был ҡыуаныслы ла, шул уҡ ваҡытта бер аҙ моңһоу әлеге ваҡиғаны йөрәктәре аша үткәрергә тура килде. Әле инде был кисерештәрҙе онотоп торорға һәм ныҡлап киләсәк тураһында уйланырға ваҡыт етте. Имтихандар башланды...**

Тағы бер ҡат иҫкә төшөрәбеҙ: быйыл бөтә сығарылыш кластары ла БДИ тапшырасаҡ. Уҡыусыларға йомғаҡлау аттестацияһының был рәүеше штат режимына инде. Һәр бала мотлаҡ ике фәндән - рус теле һәм математиканан һынау тоторға тейеш. Ә инде мәктәп программаһындағы башҡа фәндәрҙән БДИ тапшырыу-тапшырмау мәсьәләһе һәр уҡыусының үҙ ҡарамағында хәл ителә.

Беҙҙең республикала быйыл 11 класты тамамлаусы 29.992 бала БДИ һынауы тотасаҡ. Шуларҙың байтаҡ мәғлүмәт саралары, төбәк йәмәғәтселек ойошмалары һәм депутаттар корпусы вәкилдәре һәм хатта атаәсәләр булыуы мөмкин. Дөрөҫ, БДИ барышын улар шундай шарт менән генә күҙәтеүҙә ҡатнаша ала: уларҙы саҡырған мәғариф учреждениеһында күҙәтеүсенең туғаны эшләргә йә имтихан тапшырырға тейеш түгел.

Информатика һәм биологиянан тәүге имтихандар - 26 майҙа, рус теленән мотлаҡ БДИ 29 майҙа тапшырылды, ә математиканан 4 июндә буласаҡ. География менән рус әҙәбиәтенән - 1 июндә, сит телдән- 8 өләшө ике мотлаҡ фәндән тыш, тағы икешәр өҫтәмә фән һайлаған. Әйткәндәй, йәмғиәтте өйрәнеү фәне һайлап тапшырылыусы иң популяр предмет булып сыҡты - унан уҡыусыларҙың 47 проценты БДИ тапшырырға ҡарар иткән. Ун беренселәрҙең шулай уҡ байтаҡ өләшө физика, биология, тарих, химия һәм информатиканы һайлаған.

Яныраҡ, 14 майҙа Рәсәй мәғариф күҙәтеүе агентлығы яңы бойороҡ сығарҙы. Уға ярашлы, 11 класс уҡыусыларына билдәләнгән төп ваҡытта (26 майҙан 19 июнгәсә) тапшырылмаған имтихандарҙы икенсе тулҡында (7-17 июль) тапшырырға һәм был хаҡта заявка бирергә рөхсәт ителде. Ләкин өҫтәмә һайланған фәндән юғарыраҡ балл алыу өсөн БДИ-ны ҡабатлап тапшырыу рөхсәт ителмәй.



Сығарылыш уҡыусыларының икенсе тулҡын имтихандарын ҡайҙа тапшырыу (вуздамы, әллә БДИ тапшырыу пункттарындамы) мәсьәләһен һәр төбәк үҙе хәл итә ала. Ғаризалар ҡабул итеү 20 июндән дә һуңға ҡалмайынса башланып, 5 июлдә тамамлана. Ғаризаны абитуриент үҙе һайлаған вузға, йә булмаһа мәғариф идаралығының төбәк йә муниципаль органына тапшыра.

Быйылғы БДИ-ны тапшырыуҙа тағы бер яңылыҡ шул: имтихандарҙа йәмәғәт күҙәтеүселәре ҡатнаша ала. Улар мәғариф идаралыҡтары, киң июндә, йәмғиәтте өйрәнеү һәм химиянан - 11 июндә, тарих һәм физиканан 15 июндә имтихан көндәре ҡаралған.

Кемдәр теге йәки был гәфү итерлек сәбәптәр менән БДИ-ны тейешле ваҡытында тапшыра алмаһа, улар өсөн резерв көндәр ҡаралған. 11 июндә - рус теленән, 15 июндә - математиканан, 18 июндә - сит телдән, йәмғиәтте өйрәнеү, биология һәм физиканан, 19 июнь география, химия, рус әҙәбиәте, тарих һәм информатиканан һынау тоторға була.

Мотлаҡ фәндәрҙән БДИ тапшыра алмаған уҡыусыларға ла вузға инеү өсөн тағы бер мөмкинлек бирелә: мотлаҡ БДИ-ның тик берәүһен генә: рус теленән йәки математиканан һынау тапшырыуға шулай уҡ резерв көндәр ҡаралған. 17 июндә - рус теленән, 20 июнь - математиканан.

Дәүләт имтихандары бөтә фәндәр буйынса ла урындағы ваҡыт менән сәғәт 10-да башлана. Раҫланған ҡағиҙәгә ярашлы, математика, әҙәбиәт һәм информатика буйынса БДИ дүрт сәғәт барһа, физика, тарих, йәмғиәтте өйрәнеүгә 3,5 сәғәт, рус теле, биология, география һәм химияға - өс сәғәт, сит телдән 160 минут ваҡыт раҫланған.

БДИ-ға ингәндә үҙең менән артыҡ бер нәмә лә алырға рөхсәт ителмәй. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: физика буйынса имтиханға фәҡәт линейка һәм программалаштырылмаған калькулятор, географиянан - линейка һәм транспортер, химиянан - программалаштырылмаған калькулятор, Менделеевтың химик элементтар периодик системаһын, тоҙҙар, кислоталар һәм нигеҙҙәрҙең һыуҙа эреүсәнлеге таблицаһын, металдар көсәргәнешлегенең электрохимик рәтен алып инергә мөмкин. Башҡа фәндәрҙән БДИ-ға ҡара төҫтә яҙыусы гель йә капилляр ручка ғына алырға.

БДИ ваҡытында ойоштороусыларҙың талабын аныҡ үтәргә кәрәк. Һөйләшеү, рөхсәтһеҙ урындан тороп китеү, икенсе урынға күсеп ултырыу, башҡа уҡыусылар менән телдән ниндәй материалдар, әйберҙәр алыштырып алыу, кеҫә телефонын һәм бәйләнештең башҡа саралары менән файҙаланыу, оҙатыуһыҙ кабинеттан сығыу тыйыла. Әгәр ҙә берәйһе ошо ҡағиҙәләрҙе боҙһа, ойоштороусылар уны имтихандан сығарып ебәрә ала.

БДИ һөҙөмтәләре эшкәртелгәндән һуң сығарылыш уҡыусыларына улар тарафынан тупланған балдар күрһәтелгән сертификат тапшырыла. Иң күп йыйырға мөмкин булғаны - 100 балл. Уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй олимпиадаһы еңеүселәре һәм призерҙарына БДИ тапшырыу тураһында биреләсәк сертификатта тап шунса балл күрһәтеләсәк тә инде. Юғары уҡыу йорттарына үтеү балы сығарылыш уҡыусылары бөтә имтихандарҙы тапшырып бөткәндән һуң ғына иғлан ителә.

Һәр уҡыусы БДИ үткәреү процедураһының боҙолоуы тураһында имтихан көнөндә, ә имтихан һөҙөмтәләре рәсми иғлан ителгәндән һуң ике эш көнө дауамында балдар менән ризаһыҙлығын белдереп, апелляция бирә ала.

**Елена КОЛОКОЛОВА.**
**"БАШвестЪ".**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышында Октябрь районының Глумилино биҫтәһендәге бер урамға - атаҡлы бейеүсе Рудольф Нуриевтың, Киров районының Колгуевский микрорайонындағы бер урамға Фәйзи Ғәскәровтың исемдәрен биреү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

✓1 июндә Республика дауалау-физкультура диспансерында иртәнге 10-дан 18 сәғәткә тиклем врачтар балаларға сәләмәт тормош рәүеше, физкультура менән шөғөлләнеү мәсьәләләре буйынса түләүһеҙ консультация үткәрәсәк. Телефон: 233-01-14.

✓Ҡала мәҙәниәт һарайында "Иң яҡшы врач - 2009" ҡала конкурсында еңеүселәр тәбрикләнәсәк. Был юлы конкурста баш ҡаланың 40-лап дауалау учреждениеһынан 99 конкурс эше һынау тотҡан. "Тиҙ медицина ярҙамы" дауаханаһының врач-педиатры Гүзәл Ғилемшина -"Иң яҡшы педиатр", 13-сө дауахананан Эльза Сыртланова "Иң яҡшы терапевт" исемдәренә лайыҡ булған.

✓Дим районы хакимиәтендә терроризмға ҡаршы комиссия ултырышы үтте. Унда урамда һәм башҡа йәмәғәт урындарында террористик һәм экстремистик күренештәрҙе булдырмау, әйләнештән законһыҙ ҡулланылған ҡоралды алыу өсөн оператив-профилактик саралар күреүҙе дауам итергә, шулай уҡ йәштәр араһында күтәренке рух, илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләүҙе көсәйтергә, тигән ҡарар сығарылды.

✓Орджоникидзе районы прокуратураһы район предприятиеларының экологик ҡағиҙәләрҙе нисек үтәүен тикшерҙе. Тикшереү барышында һауаны бысратыусы бер нисә предприятие асыҡланды. Мәҫәлән, "Металл конструкциялар заводы"нда һәм "Востокнефтезаводмонтаж" территорияһында һауаға зарарлы матдәләр сығарыу буйынса проект эшләнмәгән һәм рөхсәт алынмаған. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса 2 предприятие етәксеһенә административ хоҡуҡ боҙоу тураһында эш асылған, 2 ойошмаға тирә-яҡты һәм атмосфераны һаҡлау законадарын боҙған өсөн күрһәтмә яҙылған.

*✓ Рәсәй тарихы буйынса сығанаҡтар, китаптар күп, уларҙа ҡайһы бер даталар буталып бөткән. Шуға ла тәүҙә бөтә дәреслектәрҙе бер төрлө стандарттарға тура килтерергә кәрәктер, тип уйлайым.*

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ХЫЯЛҒА - ҠАНАТ...

## Һынауҙар ҡайырмаһын уны

**Эш сәфәре менән Дәүләкән, Әлшәй яҡтарына юл төшкәс, был төбәктәге уҡыу йорттарының сығарылыш синыф уҡыусылары киләсәккә ниндәй хыялдар ҡороуын, ниндәй уй-ниәттәр менән яныуын асыҡлау теләге менән Дәүләкән ҡалаһының 3-сө Башҡорт гимназияһы һәм Әлшәй ауылының Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге Башҡорт лицейының IX синыф уҡыусылары Диана Шакирова, Хәйҙәр Ноғоманов, Ләйсән Сәлимйәнова, Алһыу Сөләймәнова, Гүзәл Низамова менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



**▶ Сер булмаһа, ҡайһы уҡыу йортона уҡырға инергә теләйһегеҙ, ниндәй һөнәр һайланығыҙ?**

**Алһыу:** Мин БДУ-ның филология факультетына йыйынам, йә уҡытыусы, йә журналист буласаҡмын. Был лицейға мин башҡорт теленең бөтә нескәлектәренә төшөнөү өсөн килгәйнем. Телдәр, төрлө халыҡтар әҙәбиәтен өйрәнеү оҡшай, һөнәрем шулар менән бәйле булыуын теләйем.

**Ләйсән:** Мин дә филолог булырға теләйем, сөнки балаларҙы яратам. Балалар баҡсаһында йәки мәктәптә эшләр инем.

**Хәйҙәр:** Мин архитектор һөнәрен һайланым. Ҡала буйлап йөрөгәндә теге йәки был бинаны ҡалай итеп биҙәйәсәгемде уйлап йөрөйөм. Дәүләкәндә Өфө ҡалаһындағы кеүек матур-матур офистар, йорттар төҙөргә хыялланам.

**Диана:** Бала саҡтан уҡ журналист булырға хыялландым, шуға ла БДУ-ға уҡырға барырға йыйынам. Уҡып сыҡҡас, "Юлдаш" радиоһында диктор булырға теләйем.

**Гүзәл:** Әлегә ниндәй уҡыу йортона барасаҡмын, быны белмәйем, әммә юрист буласаҡмын. Мәҙәниәт министры булырға, Салауат йыйынын үткәрергә хыялланам, шулай уҡ башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүгә күп көс һалыр инем. Ә бының өсөн, минеңсә, закондарҙы яҡшы белеү мөһим.

**▶ БДИ тураһында бөгөн төрлө фекерҙәр ишетергә була. Кемдер уны белемде баһалау өсөн бик уңай, тип таба, уға ҡаршылар ҙа әҙ түгел. Һеҙҙең БДИ-ға ҡарашығыҙ ниндәй, ул мәктәп уҡыусыһы өсөн ҡартәме, әллә, киреһенсә, яҡты өмөтхыялдарға яҡынайтыусы баҫҡысмы?**

**Алһыу:** БДИ-ны тәүҙә ҡурҡып ҡабул итһәк тә, хәҙер уға әҙерлек барышында яйлап тынысландыҡ. Курстар, факультативтар үткәрелә, хатта башҡа мәктәптәрҙән, яҡын-тирәләге ауылдарҙан уҡыусылар беҙҙең лицейға йөрөй. Кәрәкле фәндәрҙән өҫтәмә дәрестәрҙә шөғөлләнәбеҙ. Мин үҙем биш фәндән БДИ тапшырасаҡмын. Юғары уҡыу йортона уҡырға инеү өсөн ҡабаттан имтихандар биреп йөрөргә кәрәк булмаясаҡ, быныһы ла яҡшы.

**Гүзәл:** Имтихандарҙы яҡшы итеп тапшырыу өсөн 10-сы синыфтан әҙерлек алып барам. Миңә бигерәк тә бер юлы бер нисә уҡыу йортона ғариза биреү мөмкинлеге оҡшай, был йәһәттән БДИ уҡыусыға уҡырға инеү өсөн төрлө юлдар аса.

**Диана:** Йылдан-йыл БДИ тапшырыу, уҡырға инеү шарттары ауырлаша, шуға ла беҙҙең гимназияла уға әҙерлек ныҡлы алып барыла. Тырышҡан бала БДИны тапшыра ала, тип уйлайым мин.

**Хәйҙәр:** Иң мөһиме, БДИ тапшырғанда ҡаушамаҫҡа кәрәк, юҡһа, бар белгәнең онотола ла ҡуя, беҙ быының шулай икәненә алдан БДИ тапшырып ҡарағанда инандыҡ инде.

**Гүзәл:** Әлбиттә, уның кире яҡтары ла бар. Мәҫәлән, тарихтан БДИ-ны "бишле"гә тапшырыу бөтөнләй мөмкин түгел, сөнки Рәсәй тарихы буйынса сығанаҡтар, китаптар күп, уларҙа ҡайһы бер даталар буталып бөткән. Шуға ла тәүҙә бөтә дәреслектәрҙе бер төрлө стандарттарға тура килтерергә кәрәктер, тип уйлайым. Рус теленән тест тулыһынса уҡыусының белемен, телмәр байлығын, фекер тәрәнлеген баһалай алмай.

**Алһыу:** Мин инглиз теленән БДИ бирәм. Сит тел үҙендең туған телең түгел - ҡайһы бер һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү өсөн ваҡыт күп китә, икенсенән, имтихан тапшырыу формаһы ла башҡаларынан айырыла. Мин БДИ системаһын тағы еңелерәк эшләргә булыр ине, тигән фекерҙәмен.

**▶ Әле белем алған гимназия һәм лицейға килгәс, бығa тиклем үҙегеҙ һәм атай-әсәйҙәрегеҙ белмәгән берәй һәләтегеҙ асылманымы?**

**Хәйҙәр:** 3-сө Башҡорт гимназияһына уҡырға килгәс, ҡурайҙа уйнарға өйрәндем, йырлай башланым. Спорт секцияларына яҙылып, үҙемде физик яҡтан сыныҡтырҙым.

**Ләйсән:** Мин фән менән ныҡлап шөғөлләнә башланым, сөнки беҙҙең лицейҙа быының өсөн бөтә мөмкинлектәр тыуҙырылған.

**Алһыу:** Ваҡыт аҙ булһа ла синыфтан тыш сараларҙа, олимпиадаларҙа, конкурстарҙа йыш ҡатнашабыҙ. Былтыр театраль конкурста үҙемде бөтөнләй икенсе яҡтан астым.

**Гүзәл:** Бында уҡырға килгәс, рус теле менән ҡыҙыҡһына башланым һәм быйыл "Ломоносов уҡыуҙары"нда ҡатнаштым.

**Диана:** Мин үҙемде нәфис һүҙ оҫтаһы булараҡ астым, төрлө сараларҙа алып барыусы булып ҡатнаша башланым, хатта районға Президентыбыҙ килгәндә лә уны ҡаршылау сараһында алып барыусы сифатында ҡатнашырға тура килде. Шулай уҡ әҙәбиәткә, тарихҡа ҡыҙыҡһыныу уянды, хәҙер фәнни эштәр яҙырға һәм төрлө кимәлдәге конкурс, конференцияларҙа ҡатнашырға өлгөрәм.

**Шулай итеп...**

**Күпме эш хаҡы аласаҡтарын да иҫәпләмәй, ҡайҙа йылы урын биләп ултырасаҡтарын да уйламай, күңелдәренә яткан, иң мөһиме, ҡулдарынан килә торған һөнәр һайлаған бына ошондай тырыш уҡыусылар тиҙҙән юғары уҡыу йорттарында студенттар рәтен тулыландырасаҡ. Офоҡтар киңәйгән һайын, хыялдар ҙа үҙгәрә, әле улар үҙҙәре йәшәгән ҡаланы, ауылды данларға хыялланһа, киләсәктә Башҡортостан өсөн изге ғәмәлдәр башҡарыу теләге менән яна башлаясаҡ. Шулай булһын!**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШ ҠАЛА

## Халыҡ-ара конгресс үткәрә...

**Был аҙнала Өфөлә XVII "Газ. Нефть. Технологиялар - 2009" Халыҡ-ара махсус күргәҙмә һәм VIII Рәсәй нефть һәм газ сәнәғәтселәре Конгресы үтте.**

Бындай ҙур саралар үткәреү урыны итеп Башҡортостан юҡҡа ғына һайланмаған. Рәсәйҙең башҡа бер төбәгендә лә беҙҙең республикалағы кеүек бай фәнни һәм етештереү мөмкинлеге юҡ. Башҡортостанда геология, бырауҙау, нефть табыу, нефть эшкәртеү, транспорт, автоматлаштырыу, фәнни-тикшеренеү институттары, Рәсәйҙәге иң эре нефть вузын да иҫәпкә алғанда, нефть һәм газ сәнәғәтенең бөтә структураһы тормошҡа ашырыла.

Башҡа йылдарҙан айырмалы рәүештә, быйыл пленар ултырышта Белоруссия, Яҡутстан, Дағстан, Ҡаҙағстан һ.б илдәрҙән делегаттар, шулай уҡ нефть эшкәртеү өлкәһендәге мөмкинлектәре менән башҡаларҙан айырылып торған Вьетнам һәм Индонезиянан вәкилдәр ҡатнашты.

Күргәҙмәгә төрлө йүнәлештә эшләгән 300-ҙән ашыу компания үҙенең проект һәм фәнни-техник эштәрен тәҡдим итте. Түбәнге Новгород, Һамар, Свердловск, Омск, Ростов, Владимир өлкәләре, Татарстан, Коми, Удмурт республикалары һ.б. Рәсәйҙең данын яҡланы. Сил ил фирмалары - Швейцария, Чехия, Германия ла, Башҡортостандың 120 предприятиеһы ла үҙенең ҡаҙаныштары менән таныштырҙы.

## ...гастарбайтерҙарҙы ла күҙҙән ысҡындырмай

**Үткән аҙнала республиканың миграция хеҙмәткәрҙәре 500-гә яҡын төҙөлөш, сауҙа итеү һәм йәшәү объекттарын тикшереп, 100-ҙән ашыу мигрантты яуаплылыҡҡа тарттырҙы.**

Статистика күрһәтеүе буйынса, гастарбайтерҙарҙың күбеһенең Рәсәйҙә йәшәү һәм эшләү өсөн рөхсәт биреүсе документтары юҡ. Бындай тәртип боҙоу өсөн 2 меңдән алып 5 меңгә тиклем штраф ҡаралған, әгәр ҙә сит ил гражданины бер нисә тапҡыр законды боҙа икән, суд үҙенең ҡарары менән уларҙы илдән ҡыуырға ла хаҡлы. Тап шундай 9 гастарбайтер суд ҡарарынан һуң үҙ илдәренә ҡайтып китте.

Төбәктең миграция хеҙмәткәрҙәре Туймазы районындағы теплица хужалыҡтарын да тикшерҙе. Асыҡланған административ тәртип боҙоуҙар өсөн 23 протокол төҙөлдө. Шуныһы үкенесле: закон боҙоуҙарҙың яртыһы тиерлек эш биреүсегә, Рәсәй граждандарына тура килә. Мәҫәлән, дүрт эш биреүсе гастарбайтерҙарҙы тейешле документтары булмауға ҡарамаҫтан, эшкә йәлеп иткән. Статья буйынса, эшҡыуарҙарға, юридик шәхестәргә һәр бер документһыҙ сит ил эшсеһе өсөн 25 меңдән 800 мең һумға тиклем штраф ҡаралған.

Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

## Кивач шарлауығы



Беҙҙең илдә лә шарлауыҡтар күп, тик уларҙың ҡайһы берҙәре бөтөнләй һүрәтләнмәгән, фотоға ла төшөрөлмәгән. Шуға ла Рәсәйҙең иң киң һәм бейек шарлауыҡтары асылмағандыр ҙа әле...

Карелияла Суна йылғаһында бейеклеге 11 метр булған Кивач (фин һүҙе "киви" - таш) шарлауығы бар. Карел легендаһы буйынса, бер туғандар Суна һәм Шуя йылғалары гел йәнәш аҡҡан. Тик бер тапҡыр Суна ("йоҡо" тип тәржемә ителә) ял итергә ятҡан һәм уянып, апайының бик йыраҡҡа китеп өлгөргәнен күргән. Суна таштар ярып Шуя артынан йүгергән, тик ҡыуып етә алмаған. Ул үҙенә юл ярған урында Кивач шарлауығы барлыҡҡа килгән.

Был шарлауыҡ тураһында тәүге мәғлүмәттәр 1556 йылда яҙыу китабында барлыҡҡа килә. Кивачтың киң билдәлелек алыуында Санкт-Петербургтан йыраҡ урынлашмауы ла ҙур роль уйнаған. Шағир Г.Р. Державин уға ода бағышлаған, ә уның юл сәйәхәтнамәһендә шундай һүҙҙәрҙе уҡырға була: "Юлдан уң яҡта, бер саҡрым самаһы ерҙә төтөн күренде. Ул яҡынлашҡан һайын ҡуйыра барҙы. Тау янына етеп, уның башына менгәс, беҙҙең алда шундай күренеш асылды: ҡара тауҙар араһынан ҡурҡыныс тауыш менән шаулап, һыу ҡолай. Ул аҫҡа төшөп еткәс, меңәрләгән тамсыларға әйләнеп, тирә-яҡҡа сәсрәй. Тауҙарҙың ҡараңғылығы, шаулы һыуҙың өҫтөндәге аҡһыл күбек йөрәккә шом өҫтәй". 1931 йылдан бирле Кивач ҡурсаулыҡ тип иғлан ителгән.



✓ *Әгәр З. Вәлиди Мәскәүҙә ҡалған булһа, ул мотлаҡ репрессияланған булыр ине. 20-се йылдарҙа уҡ төрмәгә ябылып, үлем язаһына дусар ителгәндәр исемлегенә ул, һис шикһеҙ, индерелгән булыр ине.*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# АЛТЫНҒА НӘЖЕС ЙОҠМАЙ,

## йәки Зәки Вәлидигә яла яғыусы шовинистар ни көҫәй?



**Һуңғы айҙарҙа, аяҙ көндө йәшен атҡан һымаҡ, ҡайһы бер Мәскәү гәзиттәрендә, Интернет селтәрендә бер-бер артлы Зәки Вәлиди шәхесенә әҙәм ышанмаҫлыҡ яла яҡҡан мәғлүмәттәр баҫыла башланы. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ошо уйҙырмаларҙың бөтә Рәсәй буйынса таратылыуына йәмәғәтселек һәм власть органдары етәкселегенең иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында "З. Вәлиди: уйҙырма һәм ысынбарлыҡ" тигән түңәрәк ҡор уҙғарҙы. Ошо сарала сығыш яһаған тарихсы ғалимдар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре З. Вәлиди кеүек күренекле тарихи шәхестәребеҙгә ҡара яғып, милли республикаларҙы нисек тә булһа бөтөрөүгә иҫәп тотҡан хәҙерге шовинистарҙың мәкерле ниәттәрен фашланы. Республикаға һәм уның күренекле шәхестәренә яла яғыуҙы туҡтатыу, халҡыбыҙҙың тарихи хәтерен яңыртыу һәм нығытыуға йүнәлтелгән сараларҙы ғәмәлгә ашырыуҙы юллаған резолюция бер тауыштан ҡабул ителде. Тарих фәндәре докторы, профессор Марат ҠОЛШӘРИПОВТЫҢ ошо түңәрәк ҡорҙағы сығышын һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

Башҡорт халҡының тарихы - иң элек уның үҙ хоҡуҡтары, ер һәм азатлыҡ, үҙбилдәләнеш өсөн көрәш тарихы ул. XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдарын академик Любавский юҡҡа ғына "тарихтағы феноменаль күренеш" тип атамағандыр. Ихтилал юлбашсылары, милли хәрәкәт етәкселәре башҡорттар араһында иң хөрмәтле шәхес кимәленә күтәрелгән. Үҙҙәренең мәҙәни-рухи, әхлаҡи сифаттары, сағыу һәләттәре менән билдәле халыҡ етәкселәре айырыуса тәрән хөрмәткә һәм ололауға лайыҡ булған. Салауат Юлаев халыҡ азатлығы өсөн көрәшсе, яу башлығы булыу менән бер рәттән, шағир-импровизаторлығы менән дә дан ҡаҙана. Зәки Вәлиди - арҙаҡлы Көнсығыш тарихсыһы булып танылыу таба. Башҡорт милли хәрәкәтендә әүҙем ҡатнашҡан Шәйехзада Бабич бөйөк шағир, башҡорт әҙәбиәте классигы дәрәжәһенә күтәрелә. Башҡорт халҡының оло һөйөүенә, мәңгелек хөрмәтенә лайыҡ булған ошо шәхестәр халыҡ символына әйләнде. Азатлыҡ, фиҙаҡәрлек, ватансылыҡ рухын йөрөтөүсе ошо шәхестәребеҙ тыуған халҡының яҡшы тормошҡа өмөтөнә тоғро ҡалып, ҡан менән һуғарылған ерҙәрен, телен һәм шовинистар менән аяуһыҙ көрәштә яуланған дәүләтселеген һаҡлау өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләне. Халҡыбыҙ өсөн уларҙың исемдәре лә изге.

Үҙҙәрен асыҡтан-асыҡ "ҡара йөҙлөксөләр" итеп таныҡҡан әҙәм аҡтыҡтары арҙаҡлы шәхестәребеҙ йөҙөндә бар башҡорт халҡына тәре һуғышы ойошторҙо: уларға яла яғып, халҡыбыҙҙы рухи ҡоллоҡҡа дусар итеп, республикабыҙҙы ла юҡ итергә самалай ошо ҡара йәндәр. Үҙенең ғилми хеҙмәттәре менән бөтә донъяла танылыу тапҡан Зәки Вәлидиҙе хурларға тырышҡан Игнатьевтар, Стечкиндар, Аристарховтар, Швецовтарҙың яуыз уйҙырмаларының сәбәбе лә ошонда бит. Вәлиди өҫтөнә бысраҡ яғыу, немец фашистары менән хеҙмәттәшлектә ғәйепләү, уға ниндәйҙер эсэс частарын ойоштороуҙы япһарыу абсолют рәүештә нигеҙһеҙ, һәм был әшәкелек фашланырға тейеш. Һүҙ ниндәйҙер Денис Игнатьевтың КПРФ органы булған "Правда" гәзитендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләһе тураһында бара. Әйткәндәй, ошо мәҡәлә тәүҙә Швецовтың "Уфагубъ" сайтында күренде, шул уҡ сайтта В. Стечкиндың "Башкорт властары фашист ялсыһы Вәлидиҙе көрән таптарҙан йыуа" исемле "материалдар"ы урын алған.

Игнатьевтың "Правда" гәзитендәге "Һатлыҡ йән исемен урамға тағалар" тип аталған әшәке, яла яғыусы мәҡәләһе "Фашизмды туҡтатырбыҙ!" тигән дөйөм баш аҫтында бирелгән. Зәки Вәлиди кемде һатҡан һуң? Бында Совет Рәсәйе күҙ уңында тотола, әммә З. Вәлиди большевиктарға тоғро булырға бер ҡасан да ант итмәгән. Билдәле булыуынса, ул 1920 йылдың апрель аҙағында Сталин тарафынан Мәскәүгә саҡырып алынып, 29 июнгә тиклем аманат хәлендә тотола. Ул бары "ял итеү" өсөн Әстерханға барырға ғына рөхсәт алыуға өлгәшә. Башревком Үҙәк совет хөкүмәтенә Вәлидиҙе Башҡортостанға ҡайтарыуҙы һорап, бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итһә лә, Мәскәү был һорауҙы иғтибарға алмай. Ошо ваҡыттан алып Вәлиди Рәсәйҙә легаль булмаған хәлдә ҡала, һуңынан Урта Азияға китеп, Төркөстанда азатлыҡ хәрәкәтенә етәкселек итә.

Әгәр З. Вәлиди Мәскәүҙә ҡалған булһа, ул мотлаҡ репрессияланған булыр ине. 20-се йылдарҙа уҡ төрмәгә ябылып, үлем язаһына дусар ителгәндәр исемлегенә ул, һис шикһеҙ, индерелгән булыр ине. Хатта уны башҡорт милли хәрәкәтендә ҡатнашыусылар тулыһынса юҡ ителгән 1937 йылға тиклем дә йәшәтмәҫтәр ине. Ул саҡта М. Мортазин бригадаһында аҡ поляктарға ҡаршы батырҙарса һуғышып, Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән башҡорттарҙы ла йәлләмәгәндәр бит. Уларҙы ҡулға алғанда М. Мортазиндың "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында" китабына ҡушымта итеп бирелгән "Граждандар һуғышында башҡорт частаренең батырлыҡ күрһәткән яугирҙары исемлеге"н ҡулланғандар.

Игнатьевтың уйҙырмаларына күҙ һалһаң, совет осоронда партия органдарының "вәлидовсылыҡ"ҡа ҡаршы йүнәлтелгән директивалары иҫкә төшә. 1921 йылдың 26 сентябрендә РКП(б) ҮК бюроһы республика етәкселәренән "Вәлидовтың контрреволюцион төркөмө"нә ҡаршы аяуһыҙ көрәшкә саҡырыусы документ ҡабул итеүҙе талап итә. "Вәлидовсылыҡ"ты фашлаған саҡырыу республика партия ойошмаһы тарафынан 1922 йылдың 24 ғинуарында ҡабул ителә. Ошондай директивалар йоғонтоһонда З. Вәлидиҙе милләтселектә, авантюризмда, дан яратыуҙа ғәйепләгән, уға контрреволюционер, "башҡорт халҡының дошманы" мөһөрө баҫылған хеҙмәттәр барлыҡҡа килә. Тарихи хеҙмәттәрҙә генә түгел, башҡорт әҙәбиәтендә лә оҙаҡ йылдар буйына З. Вәлиди карикатуралаштырылып, авантюрист, эскесе, ҡатын-ҡыҙ менән буталыусы кеше итеп һүрәтләнде (И. Насыри, А. Таһиров, Ф. Иҫәнғолов романдары, Ә. Мирзаһитов драмаһы һ.б.).

Үрҙә телгә алынған В. Стечкин З. Вәлидиҙе тап ошолай ҡылыҡһырлауҙы тергеҙергә ниәтләгән, күрәһең: ул "үҙ ауылында эсергә һәм тартырға өйрәнгән беренсе кеше" булып, ошо рәүешле үҙенең алдынғы шәхес булыуын күрһәтергә теләгән, имеш. Һәр бер эсеп йәиһә тәмәке тартып ҡараған кешенең үҙенән-үҙе гонаһ эйәһе булып китмәүен кемебеҙ ҙә белә (З. Вәлидиҙең йәш сағында Ҡаҙанда тәмәке тарта башлауы тураһында үҙенә генә хас юмор менән иҫкә алып, быны һис бер кемдән йәшермәүе лә билдәле). З. Вәлидиҙең эскесе йәиһә тәмәкенән башҡа йәшәй алмаусы кеше булмауын иҫбатлауҙың һис бер кәрәге юҡ. Тик Стечкин тигән ғәйбәтсе генә Вәлидиҙе башҡорт ауылдарында эскелек һәм тәмәке тартыу таралыуҙа ғәйепләргә самалай. Әйтерһең дә, был әфәнде ошо алама ғәҙәттәрҙең башҡорт ауылына ҡайҙан килеп инеүе хаҡында бер ни белмәй!

Игнатьев-стечкин-аристарховтар З. Вәлидигә ҡара яғыу традицияһын тергеҙеп, Еңеү байрамы алдынан уны фашистарға ярҙам итеүҙә ғәйепләүгә тиклем барып етте. Йәнәһе, З. Вәлиди нацистар партияһы ағзаһы булып, Адольф Гитлер, А. Розенберг һәм башҡа фашист етәкселәре менән дуҫ булған. Бер ниндәй дәлил булмауға ҡарамаҫтан, уны милли эсэс частарын ойоштороу эшендә ҡатнашыуҙа ғәйепләйҙәр. Үҙенең уйҙырмаларына нисек тә булһа ышандырыу маҡсатында Стечкин КГБ генералы Лев Соцковтың "Неизвестный сепаратизм. На службе СД и Абвера. Из секретных досье разведки" исемле китабына һылтанып маташа. Ошо китаптың анығ битен күрһәтмәйенсә генә, 1941 йылдың авгусында Розенберг ведомствоһында З. Вәлидиҙең фон Менде менән осрашыуы тураһында мәғлүмәт бирә. Бында һүҙ үҙен Көнсығышты өйрәнеүсе ғалимға һанап, фашистарҙы үҙ иткән сәйәси эшмәкәр Герхард фон Менде тураһында бара. Әммә ул бер ҡасан да З. Вәлидиҙең дуҫы булмаған, һәм бының булыуы ла мөмкин түгел. Ысын ғалим булараҡ, З. Вәлиди политиканлыҡты күрә алмай. Үҙенең "Хәтирәләр"ендә ул фон Мендеңың I Бөтә Рәсәй мосолмандары съезында (1917 йыл) башҡорттарҙың ролен дөрөҫ баһаламауы тураһында ҡаты тәнҡит менән яҙып сыға. "Был ялған ҡайһы бер татарҙар тарафынан таратылғайны", - тип хәтерләй З. Вәлиди. Был осраҡта башҡорт делегаттарына ҡаршы сыҡҡан Ғ. Исхаҡи һәм С. Маҡсуди күҙ уңында тотола. Һуңынан Төркиәлә тап Садри Маҡсудиҙың интригалары арҡаһында З. Вәлидиҙең Мостафа Кемаль менән аралары боҙола. 1941 йылда З. Вәлиди Германияға бармаған (был Төркиәлә билдәле факт), һәм уның "вермахт тарафынан оккупацияланған Советтар Союзы ерҙәрендә булыуы" ла мөмкин булмаған хәл.

Билдәле булыуынса, төрки халыҡтары тарихы концепцияһы буйынса Төрөк Республикаһы Президенты Мостафа Кемаль (Ататөрк) менән бәхәскә инеүе арҡаһында З. Вәлиди Төркиәне ташлап, Австрияға китергә мәжбүр була. Ул бында Вена университеты студенты һәм аспиранты була, үҙе тапҡан Мешхед ҡулъяҙмаһы, йәғни Багдад хәлифе Әл-Мөҡтәдирҙең Болғар ханлығына ебәрелгән илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙландың сәйәхәтнамәһе буйынса 1935 йылда докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. Күренекле немец ғалимы Пауль Кале уны Бонн университетына эшкә саҡыра, ә 1938-1939 йылдарҙа ул Геттинген университетында уҡыта. Тик фән менән генә шөғөлләнеп, ул 1939 йылда Дрезденда "Ибн Фаҙлан юлъяҙмалары" китабын баҫтырып сығарыуға өлгәшә.

Игнатьевтың Вәлиди тураһындағы уйҙырмаларын абсурд тимәй, башҡаса баһалап булмай: "Адольф Гитлерға ант биргән, нацист партияһына ингән" З. Вәлиди һәр дәресен "Хайль Гитлер!" тип ҡысҡырып, фашистарса сәләмләп башлаған, имеш. Алдай-ялғанлай торғас, ауыҙы нимә һөйләгәнен үҙе лә ишетмәй башлай, ахыры, бындай әтрәгәләмдәр. Улар Вәлидиҙе "Гитлерҙың мосолман эштәре буйынса шәхси советнигы" итеүҙән дә тартынмай. Ошо туҙға яҙмаған, ҡоторған аҡыл тарафынан уйлап сығарылған "мәғлүмәттәр" бер ниндәй документ, һис бер тарихи сығанаҡ менән нигеҙләнмәгән, сөнки улар ер йөҙөндә юҡ һәм булыуы ла мөмкин түгел. Эмигрант, арий расаһына инмәгән халыҡ вәкиле нацистар партияһына бер нисек тә ҡабул ителмәҫ ине. Ниндәйҙер сәйер "Хадшар", "Кама" исемле эсэс дивизияларын ойоштороуға Төркиәлә йәшәгән З. Вәлидиҙең ниндәй ҡатнашлығы булыуы мөмкин? Быны бар илгә иғлан итеү өсөн бер генә бөртөк дәлил дә юҡ бит! Игнатьевтың үҙ ялғанынан тонған мейеһендә З. Вәлиди Гитлерҙың тоғро юлдашына әйләнә хатта ки. Шуға ҡарамаҫтан, ошо "яҙыу оҫтаһы" башҡорт тарихсыларын дөрөҫлөктө йәшереүҙә ғәйепләп маташа.

Әммә тарихи документтар раҫлаған дөрөҫлөктө стечкин-игнатьевтар бер ниндәй ялған менән дә ҡаплай алмаясаҡ. Ысынбарлыҡта иһә

**✓ Башҡорт халҡына 70 йыл буйына Зәки Вәлидиҙең дошман булыуын һеңдерергә тырыштылар. Халыҡ өндәшмәне, ләкин күңел түрендә үҙенең батыр улы тураһында иҫтәлектәрен һаҡланы.**

фашист Германияһында бер төркөм татар эмигранттарының "Иҙел-Урал" тип исемләнгән легион ойоштороу менән шөғөлләнгәне билдәле. 1942 йылда герман вермахтының ҡарары менән Ғәлимйән Иҙриси, Шәфи Алмаз, Ғариф Солтан татар, башҡорт, сыуаш, мари, удмурт, мордва хәрби әсирҙәренән легион төҙөй башлай. Шул уҡ татар эмигранттары 1944 йылда Грейсвальд ҡалаһында Волга-татар комитетындағы немец командованиеһы вәкилдәре фон Унгляубе һәм доктор фон Менде ҡатнашлығында Волга-татар легионы съезын ойоштора.

З. Вәлидиҙең фашистар тарафынан хупланған бына ошондай сараларҙа ҡатнашыуы тураһында бер ниндәй документ юҡ, ә немецтарҙың тик үҙҙәренә хас теүәллек менән бар башҡарылған эштәрҙе теркәп барыуы билдәле бит инде. Икенсе бөтә донъя һуғышы йылдарында З. Вәлиди Төркиәнән ситкә сыҡмай йәшәй һәм эшләй. 1942 йылда ул бер тапҡыр ғына Көнсығышты өйрәнеү буйынса немец йәмғиәтенең отчет ултырышында ҡатнашыу өсөн Берлинға бара, үҙенең яҡташтарын күреп һөйләшеү маҡсатында совет хәрби әсирҙәре тотолған бер нисә лагерҙа була. Лагерҙарҙа мосолман әсирҙәренең хәле менән таныш булған З. Вәлиди Гитлер режимының кешелекһеҙ булыуына инана, фашистик Германияның һуғышта еңеләсәген дә күҙаллай. Тирандар режимын күрә алмаған кешенең Гитлерға ҡарата яҡшы ҡараште булыуы мөмкин түгел. Тотош милләттәрҙең хоҡуҡтарын һанға һуҡмағаны өсөн Вәлиди большевиктар власын күрә алмай, һәм тап шуға күрә Совет Рәсәйендә үҙе өсөн урын тапмай.

Әлеге Игнатьев З. Вәлидигә "Гитлерҙың советнигы булғаны өсөн" өҫтәлмә гонорар түләнгән, тип яҙғанларға ла тартынмай. З. Вәлидиҙең профессорлыҡ оклады тураһында Геттинген университетының филология факультеты деканы Фр. Нойман бына нимә яҙған: " Минә билдәле булыуынса, Бонндан профессор Кале профессор Зәки Вәлиди әфәнденең айлыҡ окладын 200 марканан 300 маркаға күтәреүҙе һорап, министрлыҡҡа яңынан үтенес яҙған. Мин дә ошо үтенесем менән уның фекеренә ҡәтғи рәүештә ҡушылам, сөнки минә билдәле булыуынса, профессор Зәки Вәлиди үҙенең ғәҙәттән тыш ғилми һәләттәре менән окладын күтәреүгә тулыһынса лайыҡлы". Тимәк, З. Вәлидиҙең эш хаҡын Гитлерға хеҙмәт иткәне өсөн түгел, ә ғилми ҡаҙаныштары өсөн күтәргәндәр.

З. Вәлидиҙең 1939 йылда Истанбул университетына ҡайтыуын Игнатьев аҙ ҙа түгел, күп тә түгел - уның Төркиәлә абвер резидентураһы етәксеһе итеп тәғәйенләнеүендә күрә. Бына шулай! Авторҙың миңрәүләнгән логикаһына ярашлы, "Гитлер советнигы"на Төркиәлә шунан да кәмерәк пост биреп булмай бит инде. Ә күренекле төрөк ғалимы, тарихсы, профессор Сәлих Туғ З. Вәлидиҙең Истанбулға ҡайтыуы һәм ғилми эшмәкәрлеге тураһында бына нисек яҙа: "1939 йылдың 22 августында Мәғариф министрлығының 649-сы ҡарары менән Зәки Вәлиди 1939 йылдың 1 сентябренән Истанбул университетының әҙәбиәт факультеты профессоры итеп тәғәйенләнде, бында ул вафатына тиклем эшләп, университеттың ғорурлығы һәм данына әйләнде. Иленән саҡырыу алғас, ул шунда уҡ, һис бер шикләнеүһеҙ, ун ҡап тулы китаптары менән Европанан Истанбулға ҡайтып төштө һәм үҙ вазифаһына тотонол, Төркиәлә тороп ҡалды. Фән тауышы саҡ-саҡ ҡына ишетелгән Икенсе бөтә донъя һуғышы йылдарында беҙ уны төрки халыҡтар тарихы буйынса күләмле һәм ҡыҙыҡлы хеҙмәттәр баҫтырыусы сифатында күрәбеҙ".

З.Вәлидигә ҡара яғыу маҡсатында Мостай Кәримдең ғалим менән Истанбул ҡалаһында осрашыуы тураһында 1982 йылда бер альманахта баҫылып сыҡҡан яҙмаларына һылтаныусылар ҙа бар. Йәнәһе, халыҡ шағиры З. Вәлидиҙе яманлап яҙғас, хәҡиҡәттең башҡаса булыуы мөмкин түгел. Был саҡта З. Вәлиди кеүек шәхестәребеҙ йәмғәтселек алдында реабилитацияланмаған ине әле, һәм М. Кәримдең уның хаҡында башҡаса яҙыуы ла мөмкин булмағандыр. Хәйер, был яҙмала М. Кәрим күп хаталы фекерҙәргә юл ҡуйған. Ул З. Вәлидиҙең 1919 йылда Башҡортостанды революциөн Рәсәйҙән айырып алыу маҡсатында милли формированиеларҙы авантюраға алып барыуы тураһында яҙа. Зәки Вәлиди башҡорт ғәскәрен 1918 йылда ойоштора, ә 1919 йылда уның ғәскәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡан була. "Был ғәскәр үҙенең алданғанын төшөнгәс, ҡыҙылдар яғына сыға, ә өлгөрөп етмәгән хан Төркөстанға баҫмасыларға ҡаса...", - тип яҙа М. Кәрим. Ә бит аҡ башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына ғәскәр башлығы З. Вәлидиҙең бойороғона ярашлы 1919 йылдың февралендә сыға. Ул саҡта Вәлиди баҫмасыларға ҡасмай, ә 1920 йылдың майына тиклем Совет власы менән хеҙмәттәшлек итә. Башҡортостандың дәүләт төҙөлөшө тураһында яңы декрет ҡабул ителеп, автономияның төп хоҡуҡтары юҡҡа сығарылғас ҡына З. Вәлиди Төркөстанға китергә мәжбүр була. Мостай яҙғанса, ул Германияла гитлерсыларҙың ишек тупһаларын тапап йөрөмәгән: уҡыған, диссертация яҡлаған, билдәле немец университеттарында уҡытып йөрөгән. З. Вәлидиҙең хан булырға ынтылыуы дөрөҫлөккә тап килмәй, сөнки ул Федератив Рәсәй составында демократик милли республикалар төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуйған була.

З. Вәлидиҙең исеме аҡланғандан һуң Рәсәй ғалимдары ла уның шәхесенә ғәҙел баһа бирә башланы. Мәскәүҙә нәшер ителгән "Наше Отечество. Опыт политической истории" китабы авторҙары С. В. Кулешов, О. В. Волобуев һ.б., "Ахмед Заки Валиди Тоган: жизнь и творчество" китабы авторы, милли мәсьәләләр буйынса ҙур белгес Т. Ю. Бурмистрова кеүек тарихсылар уның шәхесе һәм эшмәкәрлеге тураһында ыңғай ҡарашын белдерҙе. Көнсығышты өйрәнеүсе билдәле немец, инглиз, төрөк, үзбәк һәм башҡа халыҡ ғалимдары Зәки Вәлидиҙе донъя кимәлендәге ғалим тип таныны. "Зәки Вәлиди Туған - бөйөк ғалим, был билдәле. Әммә ул кеше булараҡ та бөйөк", - тип яҙҙы күренекле Австрия ғалимы Герберт Янски.

З. Вәлиди шәхесенә ойошторолған һөжүм, республикабыҙға ҡаршы төрлө провокациялар Федераль Үҙәктең хәҙерге милли сәйәсәте һөҙөмтәһе ул. Уҡытыу программаларынан милли-төбәк компонентын алып ташлау, йәғни туған телдә һәм әҙәбиәтте уҡытыуҙы сикләү, төбәк тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәтеүҙе юҡ итеүгә йүнәлтелгән аҙымдар шовинистарҙы тағы ла нығыраҡ дәртләндереп ебәрҙе, урыҫ булмаған халыҡтарҙың тарихын боҙоп күрһәтеүгә, уларҙың күренекле шәхестәрен дискредитациялауға юл асты. Башҡорт халҡының һөйөклө улы Зәки Вәлидигә әҙәм ышанмаҫлыҡ яла яҡҡан "Правда" гәзите, шуның менән үҙ исеме асылын киреһенә үҙгәртеп, бысраҡ бульвар гәзиттәре рәтенә төштө, Рәсәй шовинистары рупорына әйләнде. Былар беҙҙе, башҡорт халҡы вәкилдәрен, бигерәк тә КПРФ ағзаһы булғандарҙы, ошондай енәйәткә тиң ялғанды үҙ иткән партияны инҡар итергә, КПРФ рәттәрен ташлап сығырға, "Правда" гәзитенә яҙылмаҫҡа саҡырып мөрәжәғәт итергә мәжбүр итте. Беҙ "Правда" гәзите редколлегияһынан Игнатьевтың опусын баҫҡан өсөн кисекмәҫтән ғәфү үтенеүҙе талап итәбеҙ.

Башҡорт халҡына 70 йыл буйына Зәки Вәлидиҙең дошман булыуын һеңдерергә тырыштылар. Халыҡ өндәшмәне, ләкин күңел түрендә үҙенең батыр улы тураһында иҫтәлектәрен һаҡланы. Хәҙер килеп, Зәки Вәлидиҙән фашист ялсыһы яһаусылар табылды. Шовинист әфәнделәр, һеҙҙең был алдағығыҙ һуҡыр бер тин дә тормай! Беҙ ысын күңелдән әйттек һәм әйтәсәкбеҙ: башҡорт халҡы үҙенең иң күренекле улдарының береһен бер ҡасан да онотмаҫ һәм уның яҡты хәтерен ялған уйҙырмалар менән бысратырға юл ҡуймаҫ.

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ,**
**тарих фәндәре докторы,**
**профессор.**

ҠОТ

# ҠАРТАЙЫМ МЕНӘН БЕРГӘ...

## донъяның ҡото китте

**Гәзитебеҙҙең 21-се һанында Гөлнара Яҡшыбаеваның "Ҡотобоҙ китә бит... телебеҙҙән, донъябыҙҙан, көнитмештән" тигән мәҡәләһен уҡығас та, ҡартайым менән ҡәрсәйемдең донъяһы күҙ алдыма килеп баҫты. Быға тиклем ҡәрсәйемдә барып күргән һайын йортонда нимәләр етешмәгән төҫлө тоя инем. Баҡһаң, ҡартайым менән донъяһының тап ана шул ҡото юғалған икән дә баһа! Бала саҡта беҙ уйнап үҫкән йорт-ҡураны бөгөн танырлыҡ та түгел. Шаулап-гөрләп торған донъя нисектер кесерәйеп, һағайып, ялангасланып ҡалған.**

Элек уларҙың өйөнә барып инеү менән иң беренсе ҡаршыла торған урҙа күҙгә салыныр ине. Унда таҫтамал, һөлгөләр, яулыҡтар эленгән була торғайны. Өйҙөң арҡырыһына урындыҡ ултырыр, унда һуғылған балаҫ түшәлеп, ҡораманан эшләнгән түшәк-юрғандар, яҫтыҡтар ҡат-ҡат йыйылып ҡуйылған булыр ине. Шул урындыҡ буйында мейескә арҡаһын терәп, ҡартайым ял итеп ятыр ине. Һинең килеп инеүең була, "Ҡыҙым, һин килдеңме? Әйҙә, түргә уҙ", тиген булып, һикереп тороп, үҙе янынан урын биргән булыр ине. Эргәһендә мотлаҡ Ҡөрьәне, тиҫбеһе ятыр ине. Үҙе йөрөп ҡайтҡан һуғыш сәхифәләрен, Яҡшыбайҙар нәҫеле, улар төйәк иткән урындар тураһында мауыҡтырғыс итеп һөйләгәндәре, "Һеҙ үҙ ата-бабаларығыҙҙы ете быуынға тиклем белергә тейешһегеҙ", тип, бармаҡ бөгә-бөгә һанап, шәжәрә ағасының тамырын барлағанын яҙа-йоҙа ғына хәтерләйем, бәләкәйерәк булып ҡалдым шул. Эх, әле ҡартайым тере булған булһа, үҙем өсөн күпме һабаҡ-фәһем туплаған булыр инем... Ә уң яҡта мотлаҡ һандыҡ ултыра. Ул һандыҡ, әйтерһең дә, эсе тулы хазина һаҡланған бер серле донъя ише. Ҡәрсәйем уны тиктомалдан асҡыламаны, ҡәҙерен белеп кенә аса ине. Ә асһа... беҙҙең өсөн ҡыуаныс! Беҙ, балалар, баштарыбыҙҙы һандыҡ эсенә тыға яҙып, ҡәрсәйем тирәләй эркелешәбеҙ. Нимәләр генә юҡ һуң унда! Ҡайһы саҡта беҙгә ҡәҙерле сепрәк-сапраҡ араһына йәшеренгән кәнфит-перәниктән дә өләш сығып ҡуя ине.

Ҡартайым, мәрхүм, уңған, бөтмөр, мал йәнле булғас, аҙбары тулы мал-тыуар булды. Һыйыры, кәзә-һарығы араһында ҡартайым өсөн иң затлыһы, әлбиттә, тоҡомло бейәһе ине. Эх, нисек ярата ине ул малҡайҙарҙы. Хатта аттары менән үҙ телендә һөйләшә лә ине бит ул. Бейәһе йыл һайын ҡолонлап торҙо. Ҡартайым уны үҙе һауа, шундуҡ ҡымыҙын да эшләр ине. Үҙе яһаған көбөсәктә гөжләтеп күбек майы бешер, айран әҙерләр ине. Ҡартайым донъяһының төп ҡото баҡсаһы тулып ултырған умарталарында булғандыр. Хәтеремдә, әле бәләкәй генә сағыбыҙҙа ике туған ҡустым менән ҡыҙыҡһыныуыбыҙҙы тыя алмайынса, бал ҡортоноң өйөнә һөжүм яһаныҡ - умарталағы ҡорттар сығып йөрөй торған тишеккә сыбыҡ менән төртөп ҡараныҡ. Тик был татлы ризыҡ хужалары беҙгә ҡарағанда уҫалыраҡ булып сыҡты - тупылдатып сағып сығарҙылар, саҡ иҫән ҡалынды. Ә бал айыртыуҙары үҙе бер тамаша ине бит! Ҡартайым иң беренсе беҙгә - балаларға рам ситендәге балауыҙҙарҙы ҡырҡып бирә. Хуш еҫ бөркөп торған йылы ғына балауыҙҙы ҡабыуың була, тәме шундуҡ әйтеп биргеһеҙ ләззәт биреп, ауыҙҙа ирип тарала. Тағы ла баҡса уртаһындағы һайғауҙа ат башы һөйәге тора торғайны. Быны ҡартайым донъя ҡото китмәһен өсөн ҡуйғандыр. Хәҙер уны бик һирәктәрҙең генә ихатаһында күрергә мөмкин.

Уйлайым-уйлайым да, ҡартайымдың йомарт күңеле, ҡотло ҡулдары уның йортон шулай бөтән, камил, йәнле, йәмле, ырыҫлы иткәндер. Ҡартайым был донъянан китеп барғас та өй ҡотһоҙайып ҡалды. Барып инәһең, ә урындыҡта мейескә арҡа терәп ятҡан ҡартайыбыҙ юҡ. Күҙ менән өй эсен йүгертеп сығаһың, ниндәйҙер бушлыҡ, һалҡынлыҡ солғап алғандай. Хатта үҙе менән өй йылыһын да алып китеп барған шул... Өйгә яңы килен килеп инеү менән тора-бара мейес тә үҙ урынынан шылды, урындыҡ иҫкелек ҡалдығы һаналып, сығарып ташланды, урҙаһы ла әллә ҡайҙа юҡҡа сыҡты. Теге һандыҡ меҫкен генә булып ултырған була. Һарайҙа ла инде күптән мал тауышы сыҡмай. Ярай әле, ҡартайым үҙ ваҡытында атайыма мираҫҡа ҡолон бүләк иткәйне, хәҙер был бейә ҡартайымдың төҫө булып нәҫел ҡотон дауам итә. Баҡсалары ла, бал ҡорттары осмағас, етемһерәп ҡалды. Ҡыҙғаныс! Аяныс! Умарта эсе шикелле гөжләп торған донъяның бер ҡото ла ҡалманы...

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

**✓ Салауат бер генә йыл эсендә Нәзир Ҡолбахтиндың тәүге мәғлүмәте буйынса - 22, өҫтәмә мәғлүмәттәр буйынса 30 тапҡыр һуғышҡа инә һәм шуның береһендә лә еңелмәй. Ике яҡтың килешеүе менән тамамланған яуҙары ла бар Салауаттың, ләкин барыһында ла ул ҡуйған маҡсатына ирешә.**



# БАТЫРҘАРЫБЫҘ

## беҙ уларҙы

(Башы 1-се биттә).

**Салауат батырыбыҙҙың халҡыбыҙ күңелендә мәңгелек йырҙарға әүерелгән исеме, Ағиҙел ярында үҙ урынын алған мөһабәт һыны, милли символға әүерелгән образы бар. Шулай уҡ республикабыҙ һәм милләтебеҙ йәшәйешенең күп кенә өлкәләре Салауат исеме менән бәйле. Уның исемендәге ҡала, район, театр, дәүләт премияһы, бик күп урамдар, хоккей командаһы һ.б. бар. Шул уҡ ваҡытта Салауатты беҙ рус яҙыусыһы Степан Злобин әҫәре буйынса рус ҡыҙы Оксананы яратыусы интернациональ рухлы көрәшсе, Мостай Кәримдең трагедияһында самаһыҙ ғорур, үҙе теләп диңгеҙгә инеп китеүсе тотҡон итеп тә беләбеҙ. Нисек кенә булмаһын, Салауат һәр заманға ярашлы яңы сифаттар менән балҡып, шул заманға хеҙмәт итергә тейештер ул. Ә бына XXI быуат Салауатын һеҙ нисегерәк итеп күҙаллайһығыҙ?**

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** XXI быуат Салауаты XVIII быуат Салауатынан бер яғы менән дә айырылмай. Миңә йыш ҡына: "Һәр кемдең үҙ Салауаты булырға тейеш", - тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Салауат бит тарихи шәхес. Тарихи күҙлектән ҡарағанда, әле яңы ғына, бынан ике йөҙ йылдан ашыу ваҡыт элек йәшәгән ул. Беҙ уны ҡайһы берҙә беҙҙең эраға тиклем йәшәгән шәхес итеп күҙ алдына килтереп, мифҡа әйләндерә башлайбыҙ. Халҡыбыҙ үҙенең күңелендә Салауаттың бөйөклөгөн һаҡлаған, ул үҙгәрешһеҙ, нисек бар - шулай. Ләкин Салауатты һәр кем үҙенсә күҙ алдына килтерә икән, был да тәбиғи. Документтарға һәм халыҡ хәтеренә таянып, Салауаттың инҡар итеүгә юл ҡуйылмаҫ бер нисә сифатын әйтеп китергә кәрәк. Салауат - ул сәйәсмән, дәүләт эшмәкәре, йөҙ йылға бер тыуа торған хәрби етәксе һәм шағир. Халҡыбыҙ ниндәй сифаттарға эйә, Салауат та шул һыҙаттарға эйә булған. Боронғо дәүерҙәрҙән башлап, Бөйөк Ватан һуғышына тиклемге меңәрләгән башҡорт батырҙары араһынан Салауат халыҡ тарафынан һайлап алынған. Уны халҡыбыҙ үҙенең булмышына яраҡлы кеше итеп, белеп һайлаған.

Степан Злобиндың "Салауат Юлаев" романының тәүге варианты балалар өсөн "Салауат батыр" исеме аҫтында баҫылып сыға. Унда Оксананың образы бөтөнләй юҡ. Был образды Үҙәк Комитет фильм эшләгән ваҡытта, романдың бүтән варианттарын эшләгән ваҡытта тәҡдим итә. Заманға күрә әҫәргә һәм фильмға интернациональ рух индереү маҡсатында эшләнә был. Документтар буйынса ла, риүәйәттәр буйынса беҙ Салауаттың өс ҡатынын беләбеҙ. Улар - Әминә, Гөлбәҙир һәм Зөләйха. Лосевский Салауаттың һөйгәне Фариза тураһында яҙа. Әммә был хаҡта бүтән бер урында ла, халыҡ ижадында ла юҡ.

**Ф. ҠОҘАҠАЕВ:** Ысынлап та, Салауат - ул реаль шәхес. Заманында уның исемен халыҡ хәтеренән нисек кенә юйырға тырышмаһындар, барыбер ғәҙеллек еңеп сыҡты һәм уның тыуыуына 250 йыл тулған йылдан башлап йыл һайын республика кимәлендә "Салауат көндәре" үткәрелә килеүе бының асыҡ миҫалы булып тора. Беҙ, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ 2003 йылдан башлап Салауаттың үткән хәрби юлы буйлап журналистар эстафетаһы ойоштороп, ошоға тиклем был юлдың ете этабын үттек.

Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында булһынмы, башҡа ихтилалдарҙа һәм Рус батшалығы алып барған башҡа һуғыштарҙа батырҙарыбыҙ иҫ киткес күп булған. Хәрби әҙерлек, батырлыҡ йәһәтенән бәлки, Салауаттан да ҙурыраҡ уңышҡа өлгәшкән батырҙар барҙыр. Шул уҡ Крәҫтиәндәр һуғышында Кинйә Арыҫланов, Ҡаранай Моратов, Баҙарғол Юнаев кеүек батырҙар ҙа булған. Кинйә Арыҫланов хәрби вазифаһы буйынса Салауаттан юғары торған, хәрби хәрәкәттәрҙең тактигы һәм стратегы иҫәпләнгән. Ҡаранай Моратов хәрби башлыҡ булараҡ, иҫ киткес батырлыҡтар күрһәткән, Баҙарғол Юнаев фельдмаршал дәрәжәһенә тиклем күтәрелгән. Башҡа батырҙар тураһында ла бик күп һүҙҙәр әйтергә булыр ине. Әммә халыҡ үҙенең батыры итеп фәҡәт Салауатты күргән. Минеңсә, XIX, XX быуат тарихсылары, яҙыусылары һәм шағирҙары Салауаттың халыҡ күңелендәге күркәм образын тулыландырып, рәсмиләштереп кенә ҡуйҙы.



Мирас Хәмзә улының Салауат Юлаев йәшәгән дәүергә тарихи күҙлектән ҡарағанда күп ваҡыт үтмәне, тигән фекере менән килешәм. Был беҙгә Салауаттың образын әле һыуынып өлгөрмәгән эҙҙәре, ҡылған ғәмәлдәре аша тулыраҡ кимәлдә күҙ алдына баҫтырыу мөмкинлеге бирә. Беҙҙең Салауат эҙҙәренән журналистарҙың эстафетаһын үткәреүебеҙ ҙә тап шул маҡсаттан сығып эшләнде лә инде. Беҙ ҙур табыштарға юлыҡтыҡ, тип әйтә алмайым, барыбер был эшебеҙ бушҡа булманы. Беҙ Салауаттың исеме менән бәйле Башҡортостандың барлыҡ урындарын, Рәсәй өлкәләрен йөрөп сыҡтыҡ, тотҡонлоҡта булған Палдискиҙа ла булдыҡ. Быйыл апрель айында Мәскәүгә лә барҙыҡ, ул беҙҙең туғыҙынсы экспедиция иҫәпләнә. Экспедициялар юлъяҙмалары рәүешендә ике китабыбыҙ сыҡты. Беҙгә хәҙер сит илдәрҙең архивтарына сығырға кәрәк, тип уйлайым. Салауатты беҙҙә, Башҡортостанда, яҡшы беләләр, тик бына Рәсәй кимәлендә, сит илдәрҙә, хатта урындарҙағы Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайҙары бүлектәрендә Салауат Юлаевты хоккей командаһы кимәлендә генә беләләр.

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Салауат шәхесе тейешле кимәлдән барыбер әҙерәк өйрәнелгән. Төрлөсә ҡатламдағы кешеләр өсөн өйрәнелеү кимәле лә төрлөсә. Әле беҙ "халыҡ Салауатты шулай итеп күҙ алдына килтергән", тип, бер образды күҙ уңында тотабыҙ. Әммә, әгәр ҙә уның тураһында тағы ла күберәк материалдар табылып, образы тулыланһа, беҙ Салауатты халыҡ күҙ алдына килтергәндән дә күркәмерәк итеп күреүгә ирешер инек. Мәҫәлән, 1774 йылдың ноябрь аҙағында Пугачевтан айырылғас, Салауат, ун туғыҙ ғына йәшлек егет, Башҡортостандың төньяғына килешләй генә арала ун меңлек ғәскәр төҙөп өлгәрә. Артабан ул ғәскәрен Чика Зарубин ҡарамағына ҡалдыра ла, тағы ла өс меңлек ғәскәр туплай. Ошо ғына ваҡиға ла күп нәмә тураһында һөйләй. Тимәк, Салауат ябай ғына хәрби етәксе булмаған. Уны төрлө урындарҙа төрлө кимәлдә күҙ алдына килтереүҙәре уның исеменә бәйле һәр төрлө тыйыуҙарға бәйле. Уның яҙмышы фажиғәле рәүештә ғүмеренең башынан башлап аҙағынаса тыйыуҙарға дусар ителгән. Дөрөҫөн әйткәндә, 1994 йылға тиклем. Екатерина Икенсе 1775 йылда Пугачевтың һәм уның яуҙаштарының исемен онотторооуға бәйле Манифест сығара. Ул ҡарар буйынса пугачевсыларҙың исемдәрен яҙыу ғына түгел, хатта телгә алыу ҙа тыйыла. Мин 1773-1775 йылдарҙағы "Московские ведомости", "Петербургские ведомости" гәзиттәрен ҡарап сыҡтым. Тап Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда Пугачев һәм уның яуҙаштары хаҡында бер генә һүҙ ҙә юҡ. Ә сит илдәрҙә сыҡҡан гәзиттәрҙә көн һайын тиерлек мәғлүмәт биреп барғандар. Ғөмүмән, сит илдәрҙә материалдар бик күп, уларҙы ныҡлап өйрәнергә генә кәрәк. 1784 йылда Галлела сыҡҡан китапта, 1799 йылда Францияла сыҡҡан китапта Пугачев һәм Салауат тураһында бик ҡыҙыҡлы яҙмалар бар. Уларҙа Салауаттың Михельсон менән һуғышына бына тигән баһа бирелә. Гумилевтың китаптарын алып ҡараһаң, унда гел һуғыштар хаҡында һүҙ бара. Шул ваҡыттарҙағы Орхон яҙмаларында Көлтәгин бей, Билге Ҡаған кеүек ғәскәр башлыҡтарының һуғышҡа инеүҙәре бәйән ителә. Әйтәйек, бер батыр 40 тапҡыр яуға ингән, шуның 12 яуында еңеүгә өлгәшкән. Ә Салауат бер генә йыл эсендә Нәзир Ҡолбахтиндың тәүге мәғлүмәте буйынса - 22, өҫтәмә мәғлүмәттәр буйынса 30 тапҡыр һуғышҡа инә һәм шуның береһендә лә еңелмәй. Ике яҡтың килешеүе менән тамамланған яуҙары ла бар Салауаттың, ләкин барыһында ла ул ҡуйған маҡсатына ирешә.

**Һаман да Салауат батырыбыҙ хаҡында башҡорт яҙыусыһының тарихи романын уҡый алғаныбыҙ юҡ. Аҫылғужа ағай тәүге китабын ғына яҙып өлгөрҙө. Салауат хаҡында тулы метражлы нәфис фильм төшөрөү ҙә күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Салауат исеменең ниндәй ҡөҙрәткә эйә булғанын беҙ хоккей буйынса Рәсәй чемпионаты барғанда нык тойҙоҡ. Минеңсә, ул саҡта "Салауат - чемпион!" тигән һүҙ республикабыҙҙың миллионлаған кешеләре тарафынан бер юлы әйтелгән зекер кеүек яңғырап, команданы еңеүгә алып килде һымаҡ. Шул саҡта Салауат Юлаевҡа, башҡорт халҡына ҡарата кире ҡарашта торған кешеләрҙең ҡарашы үҙгәреүен дә күрҙек. Минеңсә, был Салауат батыр рухының яңыса балҡышы ла булды. Бында хоккей уйынының массаларҙы бер юлы тоҡандырыу үҙенсәлеге, көсө генә күренмәне. Мин бында Салауат батыр рухының тере булыуының сағылышын да тойҙом, мәҫәлән.**

**Ф. ҠОҘАҠАЕВ:** Әлбиттә, хоккейҙағы еңеүҙәр хәҙерге заманда күберәк финанслауға бәйле. Был, ысынлап та, улай булмаған хәлдә лә, был фекер йәшәүгә хаҡлылыр тип уйлайым. Салауаттың үҙ халҡының яратҡан улы булып китеүендә уның шағирлығы мөһим роль уйнағандыр, тип тә уйлайым. Үҙ артынан бер-ике көн эсендә генә 10 мең кешене эйәртеп алып китер өсөн генә лә ниндәй итеп һөйләй, артынан әйҙәй белергә кәрәк. Совет осоронда Салауат иң беренсе булып ҙур кимәлдә Степан Злобин тарафынан интернациональ шәхес булараҡ күтәрелә. Протазанов был роман буйынса фильм төшөрә, аҙаҡ уның һыны Тавасиев тарафынан һәйкәл булып ҡалҡа. Әгәр ҙә ошо роман һәм ошо фильм булмаһа, аҙаҡ һәйкәле һалынмаһа, хәҙерге Салауаттың беҙ белгән образы барыбер тоноғораҡ булыр ине, тимәксемен. Тағы ла бер нәмә: Степан Злобин бит бөтөнләй башҡа батыр, әйтәйек, Кинйә Арыҫланов, Ҡаранай Моратов йә Баҙарғол Юнаев хаҡында ла роман яҙырға мөмкин ине бит әле.

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Крәҫтиәндәр һуғышында батырҙар күп булған, ә ни өсөн фәҡәт Салауат шуларҙың араһынан айырылып сыҡҡан һуң? Бында бер нисә фактор бар. Беренсенән, Салауат яугирҙәр тоҡомонан булараҡ, легендаларға ингән. Уның атаһы, олаталары төрлө яуҙарға, ихтилалдарға ҡатнашҡан. Икенсенән, мин һеҙҙең менән килешәм, Фәнил Шәмсетдинович, Салауаттың шағирлығы уның батырлығының айырылғыһыҙ өлөшө һаналған. Өсөнсөнән, Салауаттың йәш булыуы ла уның тиҙ арала танылыуына булышлыҡ иткәндер, тип әйтергә була. Дүртенсенән, йәп-йәш кенә Салауатты ил буйынса яҙалап алып йөрөүҙәре лә уның хаҡында халыҡ күңелендә бәйғәмбәрҙәргә тиң урын алыуға килтергәндер.

**_"Әгәр ҙә Степан Злобин башҡа батыр хаҡында роман яҙған булһа", тигән фекерҙе мин барыбер шартлы рәүештә ҡабул итәм. Ни өсөн тигәндә, халыҡ ижадын алып ҡараһаҡ, унда Салауат тураһында бөтә жанрҙарҙа ла иҫ киткес бай материал бар, күпме йырҙар, ҡобайырҙар ижад ителгән, хатта эпостар, легенда-риүәйәттәр яҙылған. Ә башҡа батырҙар тураһында ундай әҫәрҙәр юҡ бит. Быуаттар буйы шулай килә. Ниндәй генә батыр хаҡында кем генә, ниндәй генә роман яҙмаһын, кинофильм төшөрмәһен, Салауат ҡасан да булһа барыбер үҙенә тәғәйен кәүҙәләнешен табыр ине. Шуға ла иманым камил: әгәр ҙә крәҫтиәндәр һуғышы булмаһа, Салауат барыбер үҙенең шәхесен икенсе яҡтан асыр һәм балҡытып күрһәтер ине. Ундай тәбиғи һәләткә, энергияға эйә феномен шәхес бер нисек тә тарих саңына күмелеп ятып ҡала алмаҫ ине._**

"Әгәр ҙә Степан Злобин башҡа батыр хаҡында роман яҙған булһа", тигән фекерҙе мин барыбер шартлы рәүештә ҡабул итәм. Ни өсөн тигәндә, халыҡ ижадын алып ҡараһаҡ, унда Салауат тураһында бөтә жанрҙарҙа ла иҫ киткес бай материал бар, күпме йырҙар, ҡобайырҙар ижад ителгән, хатта эпостар, легенда-риүәйәттәр яҙылған. Ә башҡа батырҙар тураһында ундай әҫәрҙәр юҡ бит. Быуаттар буйы шулай килә. Ниндәй генә батыр хаҡында кем генә, ниндәй генә роман яҙмаһын, кинофильм төшөрмәһен, Салауат ҡасан да булһа барыбер үҙенә тәғәйен кәүҙәләнешен табыр ине. Шуға ла иманым камил: әгәр ҙә Крәҫтиәндәр һуғышы булмаһа, Салауат барыбер үҙенең шәхесен икенсе яҡтан асыр һәм балҡытып күрһәтер ине. Ул үҙ заманына күрә уҡымышлы кеше, русса грамотаға эйә булған. Ғәрәпсә лә бик тиҙ итеп яҙыу ҡеүәһенә эйә булған. 1771 йылда 19 (21) йәшендә атаһы урынына старшина булып ҡала Салауат. Өфө, Ырымбур ҡалаларына төрлө хаттар яҙып ебәрә. Һәр хәлдә, киләсәктә ул тыныс тормошта ла үҙен ҙур ғалим йә шағир итеп барыбер күрһәтер ине. Беҙ уны барыбер халҡыбыҙ тарихының сағыу шәхесе итеп белер инек. Ундай тәбиғи һәләткә, энергияға эйә феномен шәхес бер нисек тә тарих саңына күмелеп ятып ҡала алмаҫ ине.

✓ *1972 йылда Салауаттың, атаһы Юлайҙың һәм башҡаларҙың вафаты хаҡындағы сығанаҡты иң тәүҙә Ғәзиз Галин тапты, һуңынан Сидоров барып яҙып алып ҡайтты.*



# БЕҘҘЕ ҺАҠЛАЙ, һаҡлайбыҙмы?

Салауаттың интернационалист булыуына килгәндә, ул совет осоро өсөн дә, былай ҙа барыбер интернационалист булған. Әйтәйек, һорау алыу ваҡытында: "Казак Семен Семетовты казактарға башлыҡ итеп ҡуйҙым, бүтән кешеләр казактарға теймәһен, ул уларҙы ярлыҡаһын..." йәки "Сирмеш (мари- **М. И.**) Изибай Янбаевты мариҙарға башлыҡ итеп ҡуйҙым, бүтәндәр мариҙарҙы йәберһетмәһен...", тигән һүҙҙәрҙе әйтә. Унан тыш, бына Көнгөрҙө алған, Ҡатауҙы ҡамаған ваҡытта ул эшселәргә хаттар ебәрә. Уларҙа Салауаттың иҫ киткес гуманист булыуы сағыла. "Беҙ һеҙгә теймәйбеҙ, ҡаршылыҡ күрһәтмәйбеҙ, взяткалар алырға рөхсәт итмәйбеҙ, язаларға тарттырмайбыҙ...", тигән юлдар бар уның был хаттарында. Салауаттың ҡарашы беҙ күҙ алдына килтергәнгә ҡарағанда ла киңерәк булғаны күренә был миҫалдарҙа.

**Ф. ҠОҘАҠАЕВ:** Башта Салауатты атаһы яугирҙәр менән батша ғәскәренә ярҙамға ебәрә. Әммә ул, атаһының ихтыярына ҡаршы барып, яугирҙәрен Пугачевҡа алып бара. Салауат бит, дөрөҫөн әйткәндә, дворян нәҫеленән сыҡҡан старшина малайы була. Мохтажлыҡ күрмәйенсә үҫә һәм уның был аҙымы ҡапылғарай аңлашылып та бөтмәгән һымаҡ тойола. Минең, мәҫәлән, Салауаттың ни өсөн фәҡәт Пугачевҡа барып ҡушылыуының сәбәбен аңлатҡан яҙмаларҙы уҡығаным булманы. Бында төплө дәлилләү талап ителәләр.

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Ике йыл элек беҙ Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығын үткәрҙек. Шул саҡтағы документтарҙы, шәжәрәләрҙе төптән өйрәнеп ҡараһаң, ул ваҡытта башҡорттар Рус батшалығына ҡушылған, тип әйтеп булмай. Ике яҡлы килешеү төҙөгәндәр. Башҡортостан 1557 йылда Рус дәүләтенең эске провинцияһы булмаған, ул бары теп-теүәл 200 йылдан һуң ғына эске провинцияға әүерелә башлаған. 1754 йылда батшаның Указы буйынса рус батшалығының сиге Кама буйынан Яйыҡ буйына күсерелә. Хатта Баҙарғол Юнаев менән Туҡтамыш Ишбулатовтың документтарында "...Һеҙ бына эске халыҡ, ә беҙ - тышҡы халыҡ... " тип әйтелә. Башҡортостанды Рус дәүләтенең ныҡлап яулауы, заводтар төҙөй башлауы тап Салауаттың үҫмер сағына тура килә. Шайтан-Көҙөй ерҙәре ырыу ерҙәре иҫәпләнгән, тимәк, ул ерҙәр бәләкәй генә бер илдең территорияһы иҫәпләнгән. Һәм шул ерҙәргә рөхсәтһеҙ-ниһеҙ килеп тартып ал да, урмандарын ҡырҡып, ер-һыуын бысратып, йылғаларын быуып, байлыҡтарын тәләфләп, завод төҙөй башла әле. Был хәл тәнендә йәне булған кешелә иҫ киткес ризаһыҙлыҡ, нәфрәт тыуҙыра торған күренеш. Ерҙәрен һатып ебәреүсе башҡорт старшиналарына ҡаршы көрәшә Юлай Аҙналин, әллә күпме судта ҡатнаша. Шунан уға күрәләтә, бер ғәйебе булмайынса, 600 һум штраф һалып ҡуялар. Легенда буйынса Юлай улы Салауатты Ырымбурға алып бара һәм аҡса йыйып алып килгәнсе, улын аманат итеп ҡалдыра. Шундай хәлдәр Салауаттың йөрәгендә бәләкәйҙән уйылып ҡалған һәм шул саҡта Пугачевтың ирек вәғәҙә иткән өндәмәһе тарала. Салауат өсөн ошонан да уңайлы башҡа хәлдең булыуы мөмкин түгел һәм ул яугирҙәрен Пугачевҡа алып бара.

**▶ Салауат Юлаев тормошоноң ҡайһы мәлдәре әле ныҡлап өйрәнелеп бөтмәгән, тип уйлайһығыҙ?**

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Бала сағы уның легенда-риүәйәттәр аша ғына билдәле. Мин аспирант саҡта Ырымбур архивында шөғөлләндем. Унда XVII - XIX быуаттарға ҡараған материалдар бик күп. Уларҙың әле күбеһенә кеше ҡулы теймәгән. Ғәрәп теләндәге материалдар ҙа күп. Ҡолой Балтасовтың хаттары һаҡлана. Уның менән Юлай Аҙналин Пруссия һуғышында ҡатнашҡан, улар дуҫтар булғандар. Һуңынан Салауат менән Юлай ҡулға алынғас, Ҡолой Юлайҙы яҡлап күрһәтмәләр бирә. Әгәр ҙә уның Салауаттың яҙмышын хәл итеүҙә ҡатнашлығы булмаһа, беҙ уны Ҡыҙрас Муллаҡаевтар һымаҡ зыялыбыҙ тип йөрөтөр инек. Салауат ирektә - 22, ә тотҡонлоҡта 24 йыл булған, йәғни ғүмеренең иң ҙур өлөшөн ирекһеҙлектә үткәргән. Рогервиктағы бөтә материалдар Тарту архивына киткән. Эстонияның Үҙәк дәүләт архивы хәҙер ҙә Таллинда түгел, Тартула. 1972 йылда Салауаттың, атаһы Юлайҙың һәм башҡаларҙың вафаты хаҡындағы сығанаҡты иң тәүҙә Ғәзиз Галин тапты, һуңынан Сидоров барып яҙып алып ҡайтты. Был ҡағыҙҙар осҡартын рәүештә генә табылды, ә инде был архивты тетеп сыҡҡанда әллә нимәләр табырға булыр ине. Хәҙер батырыбыҙ исемен йөрөткән хоккей командаһында уйнар өсөн әллә нисә миллион долларға контракт төҙөйҙәр. Ә бит Тартуның архивында бер ай эшләр өсөн ни бары өс йөҙ генә доллар аҡса етә. Быының менән нимә әйтергә теләгәнемде аңлайһығыҙ инде.

**Ф. ҠОҘАҠАЕВ:** Ысынлап та, әгәр ҙә беҙ Салауатты бар донъя кимәленә күтәрергә теләйбеҙ икән, беҙ уны шул донъя кимәлендә өйрәнергә тейешбеҙ. 2003 йыл тәүге экспедициянан ҡайтҡас, беҙ был турала һөйләшеү алып барҙыҡ. Фекерҙәребеҙҙе Хөкүмәткә лә яҙып бирҙек, тик тәгәрмәс урынынан ҡуҙғалманы әле. Әле ойошторған экспедицияларҙы ла беҙ редакциялар иҫәбенә атҡарып сыҡтыҡ, бының өсөн беҙгә бер кем дә аҡса бүлмәне. Китаптарҙы ла үҙебеҙҙең иҫәпкә сығарҙыҡ.

Салауат, Салауат тип һөйләйбеҙ ул беҙ, әммә "Салауат көндәре" үтеп китеү менән барыһын да онотабыҙ, был сараны кампанияға әүерелдереп алдыҡ түгелме? Берәр халыҡтың шундай ҙур батыры булһа, әллә нәмә эшләрҙәр ине. Бер Салауат ҡына түгел, башҡа батырҙарыбыҙға ла мөнәсәбәт шундай уҡ. Күп осраҡта күп нәмә урталыҡтағы ваҡ чиновниктарҙан тора. Улар юғарынан фарман булһа ғына ҡыймылдай башлай, үҙ инициативаһы менән бер нәмә лә эшләмәй.

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Беҙгә донъя кимәлендә Салауат Юлаев хаҡындағы фильм кәрәк. Ана, Мэл Гибсондың фильмдары бар донъяны шаулата. Әгәр ҙә шундай кимәлдәге фильм булмай икән, Салауаттың образы тоноҡланып ҡаласаҡ. "Храброе сердце", "Гладиатор", "Спартак", "Троя" тибындағы фильм кәрәк. Быының өсөн кәмендә бер хоккей командаһын бер йыл тотоуға тиң булған сығымдар кәрәк булыр ине. Аҡса булһа, ул барыһын да эшләтәсәк. Быының өсөн кинофильм төшөрөү буйынса донъя кимәлендәге сценаристарҙы, режиссерҙарҙы йәлеп итеү генә кәрәк.



***Ысынлап та, әгәр ҙә беҙ Салауатты бар донъя кимәленә күтәрергә теләйбеҙ икән, беҙ уны шул донъя кимәлендә өйрәнергә тейешбеҙ. 2003 йыл тәүге экспедициянан ҡайтҡас, беҙ был турала һөйләшеү алып барҙыҡ. Фекерҙәребеҙҙе Хөкүмәткә лә яҙып бирҙек, тик тәгәрмәс урынынан ҡуҙғалманы әле. Әле ойошторған экспедицияларҙы ла беҙ редакциялар иҫәбенә атҡарып сыҡтыҡ, бының өсөн беҙгә бер кем дә аҡса бүлмәне. Китаптарҙы ла үҙебеҙҙең иҫәпкә сығарҙыҡ. Салауат, Салауат тип һөйләйбеҙ ул беҙ, әммә "Салауат көндәре" үтеп китеү менән барыһын да онотабыҙ, был сараны кампанияға әүерелдереп алдыҡ түгелме? Берәр халыҡтың шундай ҙур батыры булһа, әллә нәмә эшләрҙәр ине.***

**Ф. ҠОҘАҠАЕВ:** Иң беренсе нәүбәттә донъя кимәлендә яҙыласаҡ сценарийға конкурс иғлан итеү фарыз. Әгәр тейешле күләмдә аҡса табып булһа, быуна тигән фильм төшөрөргә етер ине.

**▶ Беҙ режиссер Әнүәр Нурмөхәмәтов менән Палдискиҙа булғанда ҡаланың бер мәктәбендә бәхәс килеп тыуҙы. Рогервиктың тарихы буйынса ҡарағанда ундағы климат, эш шарттары, туҡланыуҙың насар булыуы каторжандарға 5-6 йылдан артыҡ йәшәргә мөмкинлек бирмәгән. Улар күпләп ҡырылған. Ә Салауат, Юлай, Усаев һәм Почиталин унда утыҙ йылға яҡын һәм унан да оҙағыраҡ йәшәй алған. Эстондар пугачевсыларҙың бындағы "оҙон ғүмерен" Салауат менән эстон ҡыҙы араһындағы мөхәббәткә бәйләй. Йәнәһе, тап шуның арҡаһында эстондар уларҙы ашатып-тәрбиәләп торған. Беҙ иһә, уларҙың оҙаҡ йәшәү өсөн Салауаттың атаһы менән бергә булыуында һәм тыуған яҡҡа ҡасан да булһа әйләнеп ҡайтыуына өмөтләнеүендә тип күрҙек.**

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Бында мин һеҙҙең менән килешәм. Ысынлап та, өмөтһөҙ - шайтан, тиҙәр. Шул өмөт уларҙы оҙаҡ йәшәткәндер, тип ышанырға була. Ҡайһы саҡ үлергә ятҡан кешеләр ҙә күрер кешеһе булһа, шуны күрергә өмөтләнеп ята ла, шунан ғына йән бирә. Икенсе фактор тарихҡа бәйле. Рогервик ҡәлғәһе ни өсөн төҙөлгән? Петр Беренсе унда Балтик диңгеҙе ярында караптар туҡтар өсөн уңайлы урын - мол төҙөй башлай. Әммә уның был маҡсаты тормошҡа ашмай, сөнки инде төҙөп бөткән ерҙән тулҡындар нығытманы емереп тик тора. Уны 1740 йылда, 1760 йылда киренән төҙөп ҡарайҙар һәм ҡул һелтәйҙәр. Каторгаға Рогервикҡа ебәреүҙең дә төп маҡсаты шул нығытма төҙөү өсөн көс кәрәк булыуҙан килеп сыға. Ә Салауаттар барған ваҡытта мол төҙөү эше рәсми рәүештә туҡтатыла. Пугачевсылар диңгеҙгә бер генә таш та ташламаған. Мостай Кәримдең трагедияһындағы диңгеҙгә таш ташыу факты дөрөҫ түгел. Яҙыусы әҫәренең художество кимәлен күтәреү өсөн бик күп шартлы эпизодтар уйлап сығара һәм был нәфис әҙәбиәт өсөн тәбиғи хәл. Унда пугачевсылар икенсе эштәрҙә, асылда, төҙөлөштәрҙә эшләгән. Өсөнсө фактор - тәбиғәт шарттары. Ысынлап та, март айҙарында Балтик буйында ҡот осҡос әсе ел булған. Ундағы казематтарҙа мейес яғылмаған һәм пугачевсылар бер-береһенең тәненә һыйынып ултырып, ҡыш сыҡҡан. Ә йәй көнө инде, нисек кенә әйтһәң дә, унда курорт климаты. Быны бер нисек тә инҡар итеп булмай. Дүртенсе фактор, быныһында инде мин һеҙҙең менән килешәм - Салауаттың атаһы менән бергә булыуы һәм физик көсө. Палдискиҙа икенсе тапҡыр булғанда бер эстон ҡыҙы экскурсовод булды. Уға "Пугачевсылар Рогервикта ни өсөн оҙаҡ йәшәгән?" тигән һорау биргәйнеләр, ул, күҙен дә йоммай, шулай яуапланы: "Бай башҡорттар бында килеп, уларҙы аҙыҡ-түлек, кейем-һалым менән тәьмин итеп торғандар..."

**Ф. ҠОҘАҠАЕВ:** Каторга шарттарында шунсама йыл йәшәр өсөн иҫ киткес оптимист булырға кәрәк бит әле. Улар гел ҡайғырып, өмөтһөҙлеккә бирелеп ултырһа, оҙай йәшәй алмаҫ ине. Пугачевсыларҙың бында оҙаҡ йәшәй алыуында Салауаттың лидерлыҡ феномены ла роль уйнамай ҡалмағындыр, тием. Һәр хәлдә, улар меҫкен, бахыр булып йәшәмәгән унда. Улай булһалар, оҙаҡ тора алмаҫтар ине. Каторганың, төрмәнең үҙ иерархияһы була. Унда Салауат үҙен, атаһын һәм башҡаларҙы яҡларлыҡ үҙ урынын тапҡандыр, тием.

**▶ Салауаттың исемен мәңгеләштереү, донъя кимәлендә танытыр, данлыҡлы итеп өсөн тағы ла ниндәйерәк саралар күрергә мөмкин булыр ине, тип уйлайһығыҙ?**

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Аллаға шөкөр, 2004 йылдан алып Президентыбыҙ Указы буйынса "Салауат йыйыны" уҙғарыла килә. Быйыл йылға ҡарап, бәлки, ул башҡа йылдарҙан ҡайтышыраҡ та үтер, әммә был сараның киләсәктә йыл һайын үткәрелеренә тәрән ышанғы килә. Йыйынды үткәреүгә ике генә теләгем бар. Беренсенән, сценарийҙарҙы йыл һайын бер кеше эшләүе, эпизодтарҙың йыл һайын ҡабатланыуы ныҡ һиҙелә. Икенсенән, йыйындағы башҡа саралар, әйтәйек, егеттәр, ҡыҙҙар көс һынашыуҙары береһе лә Салауатҡа бәйле түгел, ябай һабантуйҙағы кеүек.

**Ф. ҠОҘАҠАЕВ:** Йыйынды театрлаштырылған тамашаға ҡороп үткәреү, минеңсә, кәрәкмәйҙер. Был хәл ғәҙәтигә әүерелде хәҙер һәм тамашаны ҡарау күңелһеҙ була башланы. Күберәк байрамдың интеллектуаль кимәленә иғтибар йүнәлдерергә тейештәрҙер. Беҙ Салауатты, ниңәлер, күберәк сәхнәлә күрергә теләйбеҙ. Сараларға килгәндә, беҙгә үҙебеҙҙең ҡаҙанда ғына ҡайнауҙан сығып, федераль кимәлдә лә ниндәйҙер проекттар эшләү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Был йәһәттән матбуғатты файҙаланырға була.

**М. ИҘЕЛБАЕВ:** Татарҙар Ҡол-Шәриф мәсетенә экскурсия яһауҙы Татарстанда йәшәүсе һәм Ҡазанға килеүсе һәр кем өсөн мотлаҡ йолаға әүерелдереп бара. Арҡайымға барыу ҙа шундай уҡ йолаға әйләнеп бара. Беҙ, мәҫәлән, Өфө-Палдиски маршрутын асып, Салауаттың эҙҙәре буйлап даими йөрөүҙе йолаға әүерелдерә алабыҙ.

**Шулай итеп...**

**Һүҙ башында беҙҙе һаҡлаған Салауат батырыбыҙ үҙе һаҡлауға, яҡлауға мохтажмы, тигән һорау ҡуйғайныҡ. Иғлан ителмәгән мәғлүмәт һуғышы барған XXI быуатта һуғыш уҡтарының байтағы Салауатыбыҙҙың изге исеменә ҡарата төбәлгән икән, был уҡтар беҙгә, рухыбыҙға төбәлгән тип аңларға ла була. Салауатыбыҙҙың яҡты исемен һаҡлау, яҡлау - ул үҙ-үҙебеҙҙе яҡлауға һәм һаҡлауға тиң.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**



# ЦИРК ОТМЕНЯЕТСЯ!

(хикәйә)

Педсовет ғәҙәттәгесә башланды. Уҡытыусылар был юлы ла докладтан һуң артыҡ һүҙ ҡуйыртып торманы. Бик урынлы тема, ата-әсәләр алдында сығыш яһарға кәрәк, тигәнерәк тапалған тәҡдимдәр менән сикләнделәр. Етеп килгән Яңы йыл байрамы алдынан кәйефтәр күтәренке, ниңә уны күрәләтә уңлы-һуллы таркатырға. Былай ҙа йыш һөйләйҙәр, ни тиһәң дә, аҡыл эше менән шөғөлләнәләр, аҡсаны, кем бирәү әйтмешләй, "ауыҙҙары менән эшләйҙәр".

Класс етәкселәре ярты йыллыҡ уҡыу йомғаҡтары тураһында һөйләне. Бөтәһе лә бер сама: өлгәш тә, балаларҙың тәртибе лә.

Профком рәйесе: "Каникулда циркка барабыҙ. Юл хаҡы ла, билеттар ҙа спонсор иҫәбенән," - тигәс, бөтәһе лә гөж килеп ҡул саптылар. Хәс тә балалар инде.

"Рәхимә Кәбировнаға рәхмәт, - тине мәктәп директоры Ғәлим Әкрәм улы, инглиз теле уҡытыусыһына ҡарап йылмайып. - Һеҙһеҙ ни эшләр инек, һәр саҡ шулай матди яҡтан ярҙам итәһегеҙ".

Бик сағыу кейенгән, сибәрлегенең кәҙерен белеп буянған йәш ханым хөрмәтенә тағы бер тапҡыр ҡул саптылар.

Шулай бик матур итеп таралышһалар ҙа була ине, тик директор, ниңәлер, педсоветты ябырға ашыҡманы. Сәбәбе бар ине.

Кисә мәктәп башлығын Хужа үҙенә саҡыртып алғайны. Мәктәп директорҙары район мәғариф бүлеге начальнигын үҙ-ара шулай атайҙар. Ҡаты ҡуллы булыуы өсөн бирелдеме икән был ҡушамат, әллә холҡонон башҡа берәй яҡтары өсөнмө - билдәһеҙ. "Хужа" тиҙәр ҙә ҡуялар. Күрәһең, начальник вазифаһындағы кеше хужа булырға тейештер. Һәр хәлдә, нык йәбеште уға был исем. Ысынлап та, ҡаты ҡылана, киреләнеп, тире тунын әйләндереп кейһә, яҡын барырлыҡ та түгел. Уҡытыу- тәрбиә эшенә артыҡ иҫе китеп бармаһа ла, мәктәптәрҙең тәҙәклөгөнә, матди хәленә талапсан. Был яҡтан һүҙ әйтерлек түгел, райондағы мәктәптәр матурайып ҡалды. Тик бына шул хужаларса үтә нык түрә булып ҡыланыуы ғына ҡыйырһыта мәктәп директорҙарын. Кисәге һөйләшеү ҙә бик ҡырҡыу булды.

- Рәхимә Кәбировнағыҙҙы грантҡа тәҡдим итегеҙ,- тине Хужа, артыҡ һүҙ ҡуйыртып тормайынса.

- Беҙ быйыл бер кемде лә тәҡдим итмәҫкә булғайныҡ бит әле, - тип, Ғәлим Әкрәмович ҡаршы төшөп ҡарағайны ла, килеп сыҡманы.

- Ул кемдең ҡатыны икәнен беләһең бит. Мин әйткәнде эшлә, бында мин һине матурһың тип саҡыртып ултыра тиһеңме әллә? Һин мине аңланыңмы?

Хужа "Һин" һүҙенә баҫым яһап әйтте. Кәйефе юҡта ул шулай "һин"дән һалдыра. Кәрәк саҡта исем - шәрифтәр ҡушып, матур итеп йылмайып һөйләшә белә лә ул...

Район үҙәгенән кәйефе ҡырылып ҡайтты Ғәлим Әкрәмовичтың. Директорҙың, мәктәп коллективының фекерен һанға һуҡмау, тип ҡабул итте ул мәғариф бүлеге начальнигының ҡыланышын. Шуға ла әле нисегерәк һүҙ ҡуҙғатырға белмәй, аптырап ҡалды. Ахырҙа, уҡытыусыларға һынаулы ҡараш ташлап, һүҙ башларға йөрьәт итте.

- Хөрмәтле коллегалар, әле район буйынса грантҡа дәғүә итеүсеәр исемлеге ҡарала, - директор эстән генә көрһөнөп, һүҙен дауам итте. - Мин Рәхимә Кәбировнаның кандидатураһын тәҡдим итәм. Мәктәптә иң зауыҡлы йыһазландырылған кабинет - инглиз теле кабинеты. Унда заман талабына яуап биргән бөтә техник саралар бар. Беҙ уларҙы мәктәп өсөн дә йыш ҡулланабыҙ. Ә инде инглиз теле буйынса балаларҙың белеменә килгәндә, былтыр Рәхимә Кәбировна республика олимпиадаһына барып ҡайтты. Был үҙе ҙур ҡаҙаныш. Ошо тәҡдим буйынса кем, нимә әйтергә теләй? Әйҙә, рәхим итегеҙ.

Директор инһбашынан ауыр йөк төшкәндәй, урынына сүгәләне. Әле генә шау- гөр килеп, балаларса ихлас көләшеп ултырған уҡытыусылар көтөлмәгән хәбәрҙе ишеткәс, өнһеҙ ҡалдылар, енәйәт өҫтөндә тотолған бурҙар кеүек, ҡараштарын бер- берсенән йәшереп шымдылар.

- Сығыш яһарға теләүселәр булмаһа, тауышҡа ҡуям. Кем дә кем Рәхимә Кәбировнаны грантҡа лайыҡлы уҡытыусы тип һанай, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ, - директор мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйып, көсөргәнешле хәлдән тиҙерәк ҡотолғоһо килде.

Ләкин директорҙан башҡа бер кем дә ҡул күтәрмәне. Белә ине Ғәлим Әкрәмович шулай булырын, һиҙенә ине.

- Улайһа, бәлки, икенсе тәҡдимдәр барҙыр? - тип аптырап һораны директор.

Профком рәйесе һикереп торҙо.

- Һуң, үткән педсоветта килешкәйнек тә. Ниңә беҙ бер тәкөргәнде кире ялайбыҙ? - тине ул һорауын һәр кемгә төбәп. Тағы шымдылар.

- Миңә һүҙ бирегеҙ,- артҡы рәттә ултырыусы биология уҡытыусыһы таҡта янына сыҡты. Тыныс холоҡло, баҫалҡы уҡытыусының ярһыуы йөҙөнә бәреп сыҡҡайны.

- Ғәлим Әкрәмович, әле бына һеҙ инглиз теле кабинетын иң матуры тинегеҙ, - тип башлап китте ул тотлоға-тотлоға. - Шулай булғас, педсоветты беҙ ниңә шул кабинетта үткәрмәйбеҙ, ә гел минең кабинетта йыйылабыҙ? Үҙем яуап бирәм: унда барыр инек тә, Рәхимә Кәбировна кабинетының асҡысын бер кемгә лә бирмәй.

- Минең кабинетта ҡиммәтле әйберҙәр күп, - сибәр ханым урындан ғына яуап бирҙе.

Биология уҡытыусыһы ла бирешергә теләмәне.

- Аквариумдағы балыҡтар ҙа, Ҡыҙыл китапҡа индерелгән бынау үҫемлектәр ҙә бик ҡиммәтле, - тине ул яуап итеп. - Минең тәҡдим шул: мин үҙемде тәҡдим итәм. Миңә даны кәрәкмәй, аҡсаһы кәрәк.

Уҡытыусы һүҙҙәрен бер тынала шартлатып әйтте лә, кире урынына барып ултырҙы. Был көтөлмәгән хәлдән ҡаушап, тағы шымдылар.

-Һуң, Зәбирә Кәбировна, грант етешмәй йәшәгәндәргә бирелә торған пособие түгел, ул иң лайыҡлыларға ғына бирелә. Был - бер. Икенсенән, мин тәҡдим генә яһаным.

- Ниңә, мине лайыҡлы түгел, тимәксеһегеҙме? - биолог урынынан торҙо, күҙлеген сисеп, йәшле күҙҙәрен һөрттө. - Йәй буйы мәктәп баҡсаһында бил бөгәм, ҡыш теплица минең елкәлә.

- Мин һеҙҙе лайыҡлы түгел тимәйем, - директор ҙа урынынан торҙо. - Дөрөҫөн әйткәндә, мин дә коллективтан кемделер айырып тәҡдим итеү яғында түгелмен. - Хужа менән һөйләшеүҙе күҙ алдына килтереп, көрһөнөп ҡуйҙы ла, һүҙен дауам итте. - Беҙҙең мәктәп районда иң алдынғыларҙан һанала. Шулай булғас, беҙҙә юғары баһаға лайыҡлы уҡытыусылар ҙа булырға тейеш. Рәхимә Кәбировнаны тәҡдим итеүемдең сәбәбе шул: ул был баһаға лайыҡлыраҡ тимәксемен. Әгәр ул үтеп китһә, киләһе йыл Зәбирә Кәбировнаны тәҡдим итербеҙ. Бер туғандар үҙ-ара килешерһегеҙ әле, - буталсыҡ фекерҙәрен артабан дауам итә алмай, директор кире урынына ултырҙы.

- Миңә һүҙ бирегеҙ әле, - алғы рәттә ултырған Әйүп Ҡәйүм улы алға сығып баҫты. Директор ризаһыҙ ғына уға төбәлде. Әйүп Ҡәйүмович күп һөйләйәсәк, әммә ҡәтғи тәҡдиме булмаясаҡ. Ул күптән пенсияла булһа ла, мәктәптән ҡайтышмай. Һәр педсоветта ҡатнашыуҙы оло уҡытыусы үҙенең төп бурысы һанай шикелле. Дәрестәре булмаһа ла, ул балалар ижады йорто аша музей етәксеһе булараҡ теркәлгән, шуға үҙен коллективтың тулы ағзаһы кеүек күрә.

- Иптәштәр, әле мин шым ғына тыңлап ултырҙым-ултырҙым да, туҡта, мәйтәм, бер-ике һүҙ әйтәйем, тинем,- Әйүп Ҡәйүмович үҙе ишетерлек кенә итеп һөйләй башланы. Ул шулай ғәҙәтләнгән: башта һүҙен яй ғына башлай ҙа, аҙаҡ, тыңлаусылар шымғас, тауышын көсәйтә. Әле лә тамам туҡтап, кабинетта тынлыҡ урынлашҡанын көтөп алып, һүҙен дауам итте.

- Мәйтәм, ундай аҡсалата премия минең эсте лә тишмәҫ ине, йәл, беҙ йәш саҡта хөкүмәттең бындайға башы етмәне. Исмаһам, мәйтәм, әбейҙе бер ҡыуандырыр инем.

Шым ғына көлөшөп алдылар ҙа, йә, артабан ни һөйләрһең, тигәндәй, уҡытыусылар сал сәсле оло кешегә төбәлделәр. Ошо мәлдә көткән Әйүп Ҡәйүмович көр тауыш менән сығышының төп өлөшөнә күсте.

- Мин ғүмер буйы туған телдән уҡыттым, ярты ғүмерем крайҙы өйрәнеү музейын ойоштороуға китте. Ауылыбыҙҙан бер яҙыусы, тел буйынса бер фән докторы, бер халыҡ артисы сыҡҡан икән, тимәк, беҙҙең мәктәптә туған тел насар уҡытылмаған. Миңә тиклем дә, минән һуң да. Милли проекттар тураһында һүҙ сыҡҡас, туған телгә иғтибар артыр, тип ҡыуанғайным. Бына һин, директор ҡустым, Рәхимәне тәҡдим иттең. Мин дә риза. Зәбирә Кәбировна ла лайыҡ. Һапһыҙ ҡара балта инде ул. Ҡыш буйы балалар уның тырышлығы менән йәшелсә-емеш ашап сыға. Дөрөҫөн әйткәндә, бөтәбеҙ ҙә дөйөм бер эште башҡарабыҙ. Ана, Фәғилә лә ишек төбөн һаҡлап ҡына ултырмай, ул да балаларға тәрбиә бирип ултыра.

- Ғәфү итегеҙ, Әйүп Ҡәйүмович, һеҙҙең анык тәҡдимегеҙ бармы? - директор оло уҡытыусының һүҙен бүлде. - Педсовет былай ҙа оҙаҡҡа һуҙылды. Әйҙәгеҙ, әлегә тәҡдимдәрҙә туҡтайыҡ. Дағүәселәр исемлеге мәктәп советында, аҙаҡ юғарыла тикшереләсәк.

- Тәҡдим тип ни, әйтеп торам бит, Рәхимә Кәбировнаның кандидатураһына мин дә риза. Ғәлим ҡустым, елдең ҡайһы яҡтан иҫкәнен мин һиҙмәй тиһеңме әллә? - Әйүп Ҡәйүмович үпкәләгән ҡиәфәттә урынына ултырҙы.

Директор аяғүрә баҫты.

- Тағы тауышҡа ҡуяйыҡмы? Рәхимә Кәбировна, бәлки, һеҙҙең үҙегеҙҙең әйтер һүҙегеҙ барҙыр?

Матур ханым алға сығып торманы, баҫҡан урынынан ғына һөйләй башланы.

- Ышанысығыҙ өсөн рәхмәт, Ғәлим Әкрәмович. Әммә миңә аҡса кәрәкмәй. Ана, бирегеҙ Зәбирә апайыма, - инглиз теле уҡытыусыһының тауышы ҡалтырап сыҡты. - Ҡалай шымтайып ултыраһығыҙ. Беләм, ни өсөн мине яратмағанығыҙҙы, - ханым ҡульяулыҡын алып, күҙ йәштәрен һөрттө. - Өйәрлә ярлыябаға...

- Ауыҙыңды үлсәп ас, - милли көрәш буйынса тренер, районды абсолют чемпионы Хафиздың көр тауышы биология кабинетын яңғыратты. Рәхимә ялп итеп артына әйләнеп, көрәшсегә усал ҡараш ташланы ла, текә баҫып, ишеккә ыңғайланы.

Шартлап ябылған ишек тауышы барыһын да һиҫкәндерҙе. Буш коридорҙы осло дағалы итектәрҙең тыҡ-тыҡ иткән тауышы яңғыратты. Тыҡылдау ҡапыл тынды, аяҡ тауыштары кире бороолдо. Ярты-лаш асылған ишектә керпектәренән ҡара тушь ағып төшкән зәңгәр күҙле сибәр йөҙ йәнә күренде.

- Цирк отменяется! - тип ҡысҡырҙы Рәхимә Кәбировна.

Ишек тағы ябылды.

Уҡытыусыларҙың йөҙҙәрендә еңелсә йылмайыу йүгереп үтте. Ҡысҡырып, әҙәпһеҙ көлөргә берәү ҙә баҙнат итмәне. Шым ғына таралыштылар. Ҡыштың ҡыҫҡа көнөн ҡараңғы төн ҡаплағайны...

Радик ӨМӨТҠУЖИН.

***✓ Башҡорт бейеүен бар камиллығында башҡарыу өсөн, һис шикһеҙ, башҡорт рухлы булырға тейешһең. Элек миндә башҡортлоҡ булһа ла, милли рухым был ансамблгә килеп, Фәйзи ағай Ғәскәров һалған бейеүҙәрҙе башҡара башлағандан һуң ғына уянды.***



ИЖАДХАНА

# БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ...

## үҙе бер театр бит ул

**Фәйзи Ғәскәров исемендәге Башҡортостан Республикаһы Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле репертуарында яңғыҙ партияларҙы башҡарғаны һәм сағыу сәхнә образдары тыуҙырғаны өсөн Алһыу Вәлиуллина, Айһылыу Ғәйнетдинова, Иршат Ғайсин, Роберт Хәмиҙуллин, Марат Яҡуповтан торған ижади коллектив Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһына тәҡдим ителде. Беҙ егеттәргә ошо йәһәттән "Башҡорт бейеүендә башҡорт рухының сағылышы һәм һеҙ уны нисек һынландыраһығыҙ?" тигән һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



**Роберт ХӘМИҘУЛЛИН, Ейәнсура районы егете:** Мин башҡорт бейеүендәге рух сағылышын күберәк Фәйзи ағай Ғәскәровтың бейеүҙәрендә тоям. Ул беҙгә ни тиклем бай ҡомартҡы ҡалдырған. Бөгөн бейеүҙәр стилләшеп, фольклор юғалып бара, шуныһы аяныслы. Хәҙерге бейеүҙәрҙә башҡорт характеры тулыһынса асылып етмәй. Ҡыҙҙарҙағы наҙ, нәзәкәтлек, егеттәрҙәге яугирлыҡ, ҡыйыулыҡ сағыла, әммә шуларҙан тыш, быуындар араһындағы бәйләнеш, ағай-эне мөнәсәбәте, еңгәй-ҡәйнеш араһындағы шаяртыуҙар кеүек холоҡ һыҙаттарын күрһәткән бейеүҙәр юҡ бит бөгөн.

Башҡорт бейеүен бар камиллығында башҡарыу өсөн, һис шикһеҙ, башҡорт рухлы булырға тейешһең. Элек миндә башҡортлоҡ булһа ла, милли рухым был ансамблгә килеп, Фәйзи ағай Ғәскәров һалған бейеүҙәрҙе башҡара башлағандан һуң ғына уянды. Башҡорт халыҡ кейемдәрен кейеп, оркестрҙың гөрләтеп башҡорт көйөн уйнатып ебәреүе була, үҙең дә һиҙмәй ҡалаһың, йөрәктән халҡына һөйөү хисе түгелә башлай, ғорурлыҡ тойғоһо күкрәктәргә менеп олғаша һәм һин ошо хис-тойғолар тулҡынында бейергә тотонаһың. Һын-килбәтең, үҙ-үҙеңде тотошоң, хәрәкәттәр, ым-ишара, күҙ ҡарашы аша сәхнә инләп бар башҡорт донъяһын, булмышын, асылын, фәлсәфәһен тамашасыға еткерергә ашҡынаһың. Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, иң тәүҙә Башҡортостан исеменән сығыш яһайбыҙ, тап шуға ла уның йөҙөн бөтәндәргә үҙ ысынбарлығында, үҙ матурлығында теүәл һәм тулы ҡанлы итеп һынландырырға тейешбеҙ. Башҡорт бейеүҙәрен стилләштереүгә юл ҡуймай, фольклорҙы һаҡлап ҡалып, Фәйзи Ғәскәров күрһәтеп киткән йүнәлештә дауам итеү - беҙҙең төп бурысыбыҙ булырға тейеш.



**Иршат ҒАЙСИН, Әбйәлил районы егете:** Башҡорт бейеүе үҙе бер театр бит ул. Һәр бейеүҙең нигеҙенә тәрән мәғәнә һалынған, уның аша башҡорттоң йәшәйешен дә, фәлсәфәһен дә, холҡон да күрергә мөмкин. Фәйзи ағай Ғәскәров һалған "Өс таған" бейеүен генә алайыҡ. Был бейеүҙе һалыр өсөн ул ауылға ҡайтып, кешеләр тормошон күҙәтә һәм ағалы-ҡустылы өс бер туғандың үҙ-ара мөнәсәбәтен сағылдырған бейеү тыуҙыра. Ә тарихи бейеүҙәрҙә һуң? Унда бит тарих ҡына бәйән ителеп ҡалмай, башҡорттоң характеры: яугирлығы ла, рух, ихтыяр көсө лә бөтөн юғарылығында сағылыш ала. Был бейеү башҡарыусыны ғына түгел, ә уға тамаша ҡылған һәр башҡорт йөрәген ғорурлыҡ тойғоһо менән дарҫлап тибергә мәжбүр итә. Фәйзи Ғәскәров һалған "Төньяҡ амурҙары" бейеүендә, мәҫәлән, ата-бабаларыбыҙҙың 1812 йылғы француздар һуғышында үҙҙәрен нисек яугирҙарса тотоуы, уҡ менән атышыуҙары, ҡылыс менән алыштары, ватандарын һаҡлап ҡалыр өсөн үҙ йәндәрен аямағанлығы, ихтыяры күрһәтелә. Ошо түгелме ни милли рух сағылышы! Шулай уҡ Риф Ғәбитовтың "Еҙ үксә" бейеүендә лә башҡорт егеттәренең көслө характеры һынландырыла.

Беҙ, бейеүсе булараҡ, башҡорт характерының ҡайһыһын ғына һынландырғанда ла, уны урынеренә еткереп, бар тулылығында кәүҙәләндерергә тейешбеҙ. Бында, әлбиттә, костюм, гримдар, башҡарыу оҫталығы, ым-ишара ла аҙ роль уйнамай, ә шулай ҙа йөрәгеңдәге халҡыңа булған һөйөүеңде, ихтирамыңды, ғорурлығыңды бейеү аша күрһәтә алғанда ғына төп маҡсатҡа өлгәшергә мөмкин. Беҙгә, ауылда үҫкән егеттәргә, халҡыбыҙ бейеүҙәрен башҡарыу күпкә еңелерәк, сөнки беҙ тыуған яҡ тәбиғәтенең гүзәллегенә һоҡланып, үҙ телебеҙҙә һөйләшеп, халҡыбыҙ һулышын тойоп, көнитмешен күреп, ауыл ҡарттарының нисек итеп һалмаҡ ҡына баҫып халыҡсан итеп бейеүен күреп үҫтек. Былар барыһы ла башҡорт бейеүҙәрен башҡарғанда рухландырыусы, илһамландырыусы, образдарҙы асырға ярҙам итеүсе төп сығанаҡтар булып тора.



**Марат ЯҠУПОВ, Учалы районы:** Беҙ, башҡорттар, тәбиғәт балалары булараҡ, ышанып барыусан, бер ҡатлы, ябай, эскерһеҙ халыҡбыҙ. Ә бер ҡыҙһаҡ, беҙҙе туҡтатып алыуы еңел түгел. Һуғышта, яу яланында башҡорттан батыр кеше юҡ. Бына ошо сифаттар беҙҙең бейеүҙәрҙә сағылыш ала ла инде. Мин үҙем бейеү башҡарғанда халҡыма хас көс, дәрт, ябайлыҡ кеүек сифаттарҙы күрһәтергә тырышам. Һәр халыҡтың үҙенә күрә бейеү техникаһы бар. Әйтәйек, татар халҡы күберәген шаярыу-көләү аша еңелсә бейеһә, беҙҙең халыҡтың бейеү хәрәкәттәре ауырыраҡ, һалмағыраҡ итеп башҡарыла. Халҡыбыҙҙың бороңғо бейеүҙәренән һаналған "Байыҡ"ты ла бит, ғәҙәттә, һалмаҡ ҡына итеп ҡарттар бейей. Был бейеүҙә үҙ ғүмерендә күпте күргән, күпте кисергән, әммә дәртен, рух күтәренкелеген, күңел көрлөгөн юғалтмаған башҡорт уҙаманының образы кәүҙәләндерелә. Уны башҡарған кеше шулай уҡ юмор тойғоһона ла эйә булырға тейеш. Рәйес ағай Низаметдинов: "Испан халҡы бейеүендә үгеҙ образы һынландырыла. Улар эйәктәрен аҫҡа төшөрөп, һөҙөп ҡарап бейейҙәр. Ә беҙҙең башҡорттарҙың бейеү тәбиғәтенең асылы атҡа, яланға ҡайтып ҡала. Шуға ла бейегәндә башыңды юғары күтәреп йөрө", - тип өйрәтә торғайны. Шулай уҡ башҡорт бейеүендә ат тояғы тауышы ишетелергә тейеш, тигән фекер ҙә йөрөй. Бөгөн башҡорт бейеүен һалған, был өлкәлә эҙләнгән кеше аҙ. Бейеү һалыусылар күберәк булғанда, башҡорттоң тәбиғәтенә яҡын булған, төп асылын һынландырған бейеүҙәр тыумай ҡалмаҫ, башҡорт бейеүенә стилләшеү ҙә артыҡ янамаҫ ине...

**Шулай итеп...**

**Бейеү сәнғәте өлкәһендә проблемалар ҙа бар икәнен, иң ҡыҙғаныс, Фәйзи Ғәскәров бейеүҙәренән тыш, яңы бейеүҙәр ижад ителмәүе хәүефләндереүен белдә беҙ. Ул хаҡта һөйләүҙе маҡсат итеп ҡуймаһаҡ та, егеттәр һүҙендә быға ишара булды. Моғайын, ул айырым һөйләшеү темаһылыр.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

ХУПЛАП...

# ИЖАДТАШЛЫҠ...

## гел уңыш килтерә

Яҙыусы, сценарист һәм әҙәбиәтсе Зөһрә Бураҡаева менән беҙ күптән таныш. Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында бер йылдары уҡыныҡ, Мәскәүҙә, студент йылдарында, аралашып, ижади пландар менән уртаҡлашып, Башҡортостанға ҡайтҡас, бөйөк эштәр ҡырырға тип хыялландыҡ. Әлегә бергәләп әллә ни хәтәр эш ҡырылмаһа ла, әйләнеп ҡараһаң, байтаҡ ҡына эшләнгән икән.

Зөһрә менән сценарий өлкәһендә ижадташлыҡ йырсы Хәсән Усмановтың "Мин - умырзая" тигән концерт программаһынан башланды. Унан һуң ике тапҡыр "Йыл уҡытыусыһы"ның тантаналы концерты, "Салауат йыйыны батыры", "Сая ҡыҙҙар" бәйгеһе, Октябрьский ҡалаһында үткән Ҡурай байрамы... Иң сағыу эштәрҙән - Нефтекама филармонияһы өсөн "Йондоҙло хыял" тамашаһы һәм, әлбиттә, "Их, әс егет, әс егет, Азат, Азамат, Байегет!" театраль тамашаһы. Был театраль тамаша Зөһрәгә лә, миңә лә, хореограф Сулпан Асҡарова һәм рәссам Фәрхәт Ихсановҡа ла яңы профессиональ баҫҡысҡа баҫырға ярҙам итте, ҙур популярлыҡ килтерҙе. Шунан бирле беҙ барыбыҙ ҙа, ә шулай уҡ билдәле композитор Урал Иҙелбаев, бер команда булып эшләйбеҙ, ижадта ла, тормошта ла ысын дуҫтарға әйләндек.

Зөһрә Бураҡаеваның һәр сценарийы берәй ҡыҙыҡлы сюжетҡа ҡоролған. Ә һәр сюжеты берәй тәрән фекерҙе аса. Шуға ла берәй ҡасан Зөһрәнең профессиональ, башҡорт театры өсөн махсус яҙған драматург булып китеүенә өмөт ҙур. Зөһрә Бураҡаеваның "Нур" татар театрында ҡуйылған "Сайрар кошым" инсценировкаһы (Р. Гюнтекиндың романы буйынса) - быға асыҡ дәлил.

Шәйехзада Бабич премияһы үҙен төрлө яҡтан аса алған, сағыу эштәре булған йәштәргә бирелә. Зөһрәнең театр һәм тамашалар өлкәһендә лә, әҙәбиәттә лә, милли кинола ла сағыу эштәре бихисап. Шуға ла мин Зөһрә Бураҡаеваның ошо премияға тәҡдим ителеүен ҡуш ҡуллап хуплайым.

**Рөстәм ХӘКИМОВ,**
**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының баш режиссеры,**
**Ш. Бабич исемендәге премия лауреаты.**

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ЗӨҺРӘ

Зөһрә Бураҡаева менән беҙ 2006 йылда Юлдыбай ауылының оло тантанаһын - 800 йыллығын үткәргән ваҡытта танышып киттек. Аҡташ тауында "Түңгәүер ерендә - ырыуҙар ҡоро" тамашаһын да, шәжәрә байрамын да, башҡа төрлө саралрҙы ла бергәләп үткәрҙек. Төп тамашала Зөһрә сценарий авторы, ҡайһы сараларҙа режиссер ҙа булды, күп һорауҙар буйынса кәңәштәр биреп, ярҙамлашып йөрөнө. Былдай ҡатмарлы, яуаплы сараларҙа бергә эшләгән кешеләрҙең сифаттары бик ныҡ асыла. Шуға ла Зөһрәнең үҙ эшенә етди ҡарауы, һәр нәмәне урын-еренә еткереп эшләй белеүе, ә шулай уҡ һәр кеше менән уртаҡ телде тиҙ табыуы, алсаҡлығы, ярҙамсыллығы күңелгә хуш килде. Шулай уҡ Зөһрәнең башҡорт тарихын һәм мәҙәниәтен тәрән белеүе һоҡландырҙы.

Зөһрә Бураҡаева менән ижади дуҫлыҡ әле лә дауам итә. "Башҡортостан" киностудияһы төшөргән "Рәхмәт" комедияһында (Зөһрә унда сценарий авторҙарының береһе һәм фильм директоры) төп ролдәрҙең береһендә беҙҙең Юлдыбай егете Морат Амантаев төштө - Аҡташ тауындағы тамашала ул йөрәктәрҙе тетрәндерерлек итеп Шәйехзада Бабич булып уйнағайны. Былтыр Конгресс-холда гөрләп-шаулап үткән "Беҙ үҙебеҙ - Юлдыбай" концертында ла сценарий авторы ла, шунда яңғыраған дәртле Юлдыбай ауылы гимнының авторы ла - Зөһрә.

Шундай рухлы, белемле, әҙәбиәттә лә, сәнғәттә лә үҙен сағыу шәхес итеп таныта алған, өс бала әсәһе, актив йәмәғәт эшмәкәре Зөһрә Бураҡаеваның Шәйехзада Бабич исемендәге абруйлы премияға тәҡдим ителеүен беҙ ҡуш ҡуллап хуплайбыҙ.

**Әхмәт АЙЫТҠОЛОВ,**
**Йылайыр районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге мөдире.**

✓ *Айырыуса хәүеф тыуҙырыусы ғаилә ағзаһын, йәиһә предметты бала ҡәләм менән ныҡыраҡ баҫып төшөрә, бер нисә ҡат уратып ала, йәки уны штрихлап ҡуя.*



АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

**"Киске Өфө"лә Миләүшә Юлдашбаеваның онотолған уйындарын уҡыным да, үҙемдең бала саҡ уйындарын иҫкә төшөрҙөм. Тыуған ауылым Үрге Бикҡужаның Һайыҫҡан урамындағы ун өйҙә утыҙлаған бала үҫтек. Ниндәй генә уйындар уйнамай торғайныҡ. Баланы сыныҡтырыусы, сыҙамлыҡҡа өйрәтеүсе был уйындарҙың иҫтә ҡалғандарын гәзит уҡыусылар менән дә уртаҡлашайым әле, тинем.**

# БАЛА САҒЫМ - ҠОЛОН САҒЫМ,

## йүгереп йөрөп уйнар сағым

**"Әүһәләк, таған атыу"** - арҡанды өйрөлтөп-өйрөлтөп атынаһың, кем уҙа-рҙан ҡоштай осоп бөүеләнең.

**"Ҙур балыҡ, үле балыҡ"** - танауҙы баҫаһың да, һыу төбөнә сумаһың. Кем оҙаҡ тора - ҙур балыҡ, тиҙ ҡалҡҡандар - үле балыҡ исеме ала.

**"Шүрәле"** - йәй һыу инер алдынан күҙҙе генә ялтыратып ҡалдырып, тотош түйин (һыу батҡағы) менән буялабыҙ. Бәләкәстәрҙе баҫтырабыҙ, улар сырылдашып ҡаса. Ҡурҡмағандары шүрәлегә әйләнә - үҙҙәре лә батҡаҡҡа буяла.



**"Асалаҡ-йомалаҡ"** - теҙелешеп тораһың. Уйынды алып барыусы "асалаҡ" тиһә, күҙҙәрҙе ҙур итеп асабыҙ, "йомалаҡ" тигәндә сытырлатып йомабыҙ. Ул шәп итеп әйтә, өлгөрмәгәндәр уйындан сыға. Күҙҙәргә күпмә күнегеү эшләнгән, хәҙер фән дә шулай өйрәтә.

**"Ҡыҙылыҡды йыйыу"** - теҙелешеп торабыҙ, итәкте тубыҡҡа тиклем күтәрәбеҙ. Алып барыусы "ҡыҙылыҡды йый", тип ҡысҡырыуға итәктәрҙе төшөрөп, сүкәйеп ултыраһың, аяҡтарҙы йәшерәһең. Өлгөрмәһәң - сыбыҡ эләгә.

**"Йомро-йомро йомғағым"** - аяҡтарҙы ҡулдар менән тотаһың, баш ҡул араһына йәшерелә һәм өҫтән һарҡыуға тәгәрәгән ыңғайы "йомро-йомро йомғағым, ҡайҙа китеп бараһың?" тип һамаҡлайһың. Тәндәр күгәреп бөтә торғайны, ләкин барыбер ҡыҙыҡ ине.

**"Оскалаҡ-күбәләк"** - бер нисә аҙым алыҫлыҡта түңәрәктәр һыҙыла, шунда тиклем аяҡ осонда ғына ҡулдар менән елкенеп барып етәһең һәм түңәрәк эсендә елпенеп тораһың. Кем оҙаҡ елкенә - шул еңеүсе була.

**"Иләкме, көҙгөмө"** - быны йомаҡ ҡойошҡанда уйнайһың. Теҙелеп ултыраһың да, һәр кемгә йомаҡ әйтәһең. Яуап тапмағандан "иләкме, көҙгөмө" тип һорайһың. Иләк тиһә, башын он иләгән кеүек "иләйһең", көҙгө тиһә, ҡолағынан тотоп баҫтыраһың. Ҡалғандар ҡул саба.

**"Кәри туп"** - был уйын ваҡытында ҡасып барған кешегә тейҙерергә кәрәк.

**"Соҡор туп"** - ете соҡор әҙерләйһең, туп етенсеһенә төшөргә тейеш. Ҡыйыш тәгәрәтһәң - уйындан сығаһың.

**"Солдатский туп"** - ике төркөм ҡара-ҡаршы баҫа ла, тупты бәрә, ул ергә төшмәҫкә тейеш. Мәрәйҙе күберәк йыйған яҡ еңә.

**"Семтегүт"** - дөм ҡараңғы урында йәшенәһең, һанағанда иң аҙаҡтан ҡалған кеше башҡаларҙы эҙләй, тапһа, әсе итеп семтеп ҡысҡырта.

**"Энәгараҡ"** - "Атый-батый-бат" тип ҡапаҡлайһың, кем "бат" була, шул бер сирек оҙонлоҡтағы ағасты ҡуйы үлән араһына ырғыта, ҡалғандар эҙләй, тапҡан кеше еңеүсе, ул уйынды дауам итә.

**"Бер аяғым тимер, икенсеһе - сөгөн"** - шул һүҙҙәрҙе һамаҡлап, бейектән һикерәһең, ә төшөп барғанда "күктән ергә һикерәм", тип әйтеп өлгөрөргә кәрәк.

**"Мандалинка"** - ауыҙҙы асып, тештәрҙе күрһәтәһең дә, бармаҡтарҙы йөрөтөп көй сығараһың. Ә төп "көйсә" тыңлап, баһа бирә (мандолина һүҙен кемдән алғанбыҙҙыр инде).

**"Сүлмәк ватыу"** - үҫкәндә бәләкәй туғандарҙы ҡарау беҙгә йөкмәтелә ине. Нисәләр аҙым араны билдәләйбеҙ ҙә, бәләкәс туғанды елкәгә ултыртып, йүгерәбеҙ. Кем барып етә - еңеүсе, ә артта ҡалғандарҙың сүлмәге "ватылған", уйындан сыға.

**"Фаф"** - быныһы һүҙгә "ф" хәрефен ҡушып һөйләү. Ҡайһы берәүҙәр оҙон әкиәтте лә һөйләй ала ине, бәғзеләр 1-2 йомаҡ ҡына әйтә.

**"Ҡуҙна"** - уныһын малайҙар уйнай. Һөйәк ашыҡтарын йыялар, ялтыраталар. Теҙеп ҡуялар ҙа бер ҡуҙна менән бәрәләр. Ҡолаған ҡуҙналар бәргән кешегә була.

**"Осмалаҡ"** - сыбыҡты бармаҡ буйы һындыраһың да һибеп ебәрәһең. Кем күп йыя - шул еңеүсе, артабан сыбыҡтарҙы ул һибә.

**"Дүртмөйөш"** - дүрт кеше дүрт мөйөшкә баҫа, ҡапаҡлағанда артта ҡалған кеше уртаға баҫа. Мөйөштәр урын алыштырғанда уртағы кеше мөйөштә "баҫып алырға" тейеш, урынһыҙ ҡалған уртаға баҫа.

**"Кем элек"** - Ағиҙелдән төрлө төҫтәге матур таштарҙы йыябыҙ ҙа, 1-2 метрлыҡ оҙонлоҡта теҙеп һалабыҙ. Беребеҙ: "Бер, ике, өс, кем элек" -, тип ҡысҡырыуға, ҡалғандар таштарҙы йыя башлай. Кем күберәк йыйған, уйынды дауам итә.

**"Арҡа тырнау"** - уҡлау ҡалынлыҡтағы 1 метр самаһы шыма ағастарҙы теҙеп сығаһың (баҫҡыс һымаҡ, әммә йыш итеп) һәм



ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ҺҮРӘТТӘР... НИМӘ ТУРАҺЫНДА ҺӨЙЛӘЙ?

**Баланың ҡағыҙға төшөргән ғаилә һүрәте уның эмоциональ күңел торошон билдәләргә, уны яҡшыраҡ аңларға ярҙам итәсәк.**

Бының өсөн 5 йәше тулған балаға ҡағыҙ, төҫлө ҡәләмдәр биреп, ғаилә һүрәтен төшөрөүен һорарға кәрәк. Әгәр ҙә бала һеҙҙең һорауҙы аңламай һәм "Нимә ул ғаилә?" - тип һорай икән, тимәк, бала аңында "ғаилә" төшөнсәһе формалашмаған.

Тест үткәрер алдынан түбәндәгеләрҙе иҫегеҙҙә тотоғоҙ:

баланың кәйефе күтәренке булһын, юғиһә, кире һөҙөмтә аласаҡһығыҙ;

бала һүрәт төшөргәндә уның янында тормағыҙ, ә ситтән генә күҙәтегеҙ;

бала иң тәүҙә кемде, йә нимәне төшөрә, шуға иғтибар итегеҙ.

Һүрәт әҙерме? Улайһа, уны түбәндәге ҡағиҙәләргә таянып, нимә аңлатыуын асыҡлап ҡарайыҡ.

**1-се ҡағиҙә.** Һүрәттә бер нәмә лә осраҡлы барлыҡҡа килмәй, ул эмоциялар, тойғолар көйҙәләнеше. Әгәр ҙә унда ғаилә ағзаларының берәйһе булмаһа, был түбәндәгеләрҙе аңлатыуы мөмкин:

а) бала аңһыҙ рәүештә был кешегә кире тойғолар кисерә. Шулай ҙа ул ғаилә ағзаларының береһе оҡшамаһа ла, уны яратырға тейешлеген яҡшы аңлай. Мәҫәлән, "Апайымды мин яратырға тейешмен, ләкин ул мине гел илата, шуға ла мин уны һүрәткә төшөрмәйем".

б) был кеше менән бала араһында эмоциональ бәйләнеш юҡ. Ул кеше, тимәк, баланың тойғолар донъяһында бөтөнләй урын алмаған.

**2-се ҡағиҙә.** Әгәр ҙә һүрәттә бала үҙе булмаһа, ул саҡта:

а) был уның яҡындары араһында үҙен таба алмауы тураһында һөйләй: "Мине күрмәйҙәр", "Минә улар араһында үҙемдең урынымды табыуы ауыр".

б) йәиһә: "Минә уларһыҙ ҙа яҡшы", "Мин улар араһында үҙ урынымды табырға ынтылмайым да".

**3-сө ҡағиҙә.** Һүрәттә төшөрөлгән һәр ғаилә ағзаһының, йорт хайуандарының, йәки берәй предметтың ҙурлығы уның ошо мәлдә бала күңелендә ниндәй урын алып тороуы менән бәйле.

**4-се ҡағиҙә.** Һүрәт төшөрөлөп бөткәс, баланан кемдең кем булыуын һорағыҙ. Ҡайһы саҡта берәй ғаилә ағзаһы урынына уйлап сығарылған персонаж барлыҡҡа килеүе ихтимал: принц, тылсымсы һ.б. Шулай итеп, бала үҙенең фантазияһында уйлап сығарылған мөнәсәбәттәр ярҙамында булһа ла үҙенең ҡайһы бер талаптарын ҡәнәғәтләндерә. Яйлап балаға нимә етмәүен асыҡлап, проблеманы хәл итергә тырышырға кәрәк.

**5-се ҡағиҙә.** Предметтарҙың һәм персонаждарҙың ҡағыҙ битендә ниндәй бейеклектә урынлашыуына ла иғтибар итегеҙ. Балалар, үҙҙәре уйлауынса, ғаиләлә кем баш, шуны иң бейеккә урынлаштыра. Һүрәттә телевизор йәки өләсәй иң өҫтә тора икән, бала тап улар башҡалар менән идара итә, тип уйлай.

**6-сы ҡағиҙә.** Персонаждар араһындағы алыҫлыҡ психологик дистанция менән бәйле. Кемде үҙенә яҡыныраҡ төшөргән, шул кеше балаға психологик яҡтан да "яҡыныраҡ". Был башҡа ғаилә ағзаларына ла ҡағыла. Кемде ул үҙ-ара яҡыныраҡ итеп күрә, ғәҙәттә, уларҙы бергә төшөрә (атай һәм әсәй, олатай һәм өләсәй).

**7-се ҡағиҙә.** Әгәр ҙә бала үҙен бәләкәй генә итеп төшөргән икән, был әлеге ваҡытта уның үҙенә ҡуйған баһаһы түбән икәнлеге тураһында һөйләй.

**8-се ҡағиҙә.** Бер-береһенә тейеп, мәҫәлән, етәкләшеп тороусы персонаждар ысынбарлыҡта ла тығыҙ психологик бәйләнештә булалар (әсәй һәм өләсәй, атай һәм машина, атай һәм бала һ.б.).

**9-сы ҡағиҙә.** Айырыуса хәүеф тыуҙырыусы ғаилә ағзаһын, йәиһә предметты бала ҡәләм менән ныҡыраҡ баҫып төшөрә, бер нисә ҡат уратып ала, йәки уны штрихлап ҡуя. Ҡайһы берҙә, киреһенсә, күренер-күренмәҫ линия ҡуллана.

**10-сы ҡағиҙә.** Баш көүҙәнең иң әһәмиәтле өлөшө. Аҡыл һәм оҫталыҡ тап башта була. Бала иң аҡыллы тип иҫәпләгән кешеһенең башын да ҙур итеп һүрәтләй. Күҙҙәр, бала аңында, илар өсөн бирелгән. Илау - тойғоларҙы белдереү сараһы ла. Ҙур итеп асылған күҙле персонаждар ярҙам һорай, тип аңларға кәрәк. Ә кемдәрҙең күҙҙәре урынында нөктә йәки һыҙыҡ ҡына, улар, иларға ярамай, тип уйлай, ярҙам да һорарға ҡыймай.

**11-се ҡағиҙә.** Ҡолаҡтар - тәңкит һәм башҡаларҙың һинең туралағы фекерҙәрен тыңлау ағзаһы. Ҙур ҡолаҡлы персонаждар -иң тыңлаусандары. Ә кемдәр бөтөнләй ҡолаҡһыҙ, тимәк, улар башҡаларҙың үҙҙәре тураһында һөйләгән һүҙҙәренә бөтөнләй ҡолаҡ һалмай.

**12-се ҡағиҙә.** Ауыҙ - бала аңында башҡаларға ташланыу, уларҙы йәберләү ағзаһы. Килбәтһеҙ ауыҙлы персонаж бала өсөн ҡурҡыныс сығанағы. Әгәр ҙә ауыҙ бөтөнләй юҡ йәки уның урынында бәләкәй генә һыҙыҡ икән, ул үҙ тойғоларын башҡаларҙан йәшерә, тойғоларын һүҙҙәр менән әйтеп бирә, йәки башҡаларға йоғонто яһай алмай.

**13-сө ҡағиҙә.** Кешенең муйыны баштың тойғоларҙы контролдә тотоуын символлаштыра. Кемдә муйын бар, ул кеше тойғолары менән идара итә ала. Ғәҙәттә, балалар ололарҙы муйынлы итеп, үҙҙәрен муйынһыҙ төшөрә.

**14-се ҡағиҙә.** Ҡулдар тотоноу, нимәлер эшләү, үҙгәртеү, башҡа кешеләр менән аралашыу өсөн кәрәк. Ҡулда бармаҡтар ни тиклем күберәк була, бала шул кешене көслө итеп тоя. Бармаҡтар аҙыраҡ икән, был баланың эске көсһөҙлөгө, нимәлер эшләй алмауы тураһында һөйләй. Ғаилә ағзаһы балаға ни тиклем ҡәҙерлерәк, уның ҡулдары шул тиклем күберәк булыуы ла ихтимал.

**15-се ҡағиҙә.** Һүрәттә аяҡтар ысынбарлыҡта ныҡлы баҫып тороу һәм ирекле атлап йөрөй алыу символы. Уң аяҡ ысынбарлыҡтағы, ә һулы үҙ-ара аралашыуҙар донъяһындағы таяуҙы аңлата. Персонаждар бер рәткә теҙелеп төшөрөлгән икән, уларҙың аяҡтары аҫтынан һыҙыҡ үткәреп, кемдең таяуы ныҡыраҡ икәнен белергә була.

✓*Еңелеү әсе булыуы ихтимал, әммә, һуңғы сиктә, әсе тәм улай уҡ насар түгел, ни тиһәң дә, әсе тәмләткес һалынмаһа, беҙҙең ашаған аҙығыбыҙ ҙа улай уҡ тәмле булмаҫ ине.*





берәү арҡаһы менән уларҙың өҫтөнә ята. Уны ике кеше ике ҡулынан һөйрәй, арҡа ауырта, кем сыҙамай - уйындан сыға. Күлдәк арҡаһы туҙып бөтә торғайны.

**"Жучка"** - элек был уйынды белмәгән малайҙар булманы, хәҙер берәүһе лә белмәй. Ҙур ғына йоронға ҡурғашмы, тимер киҫәгеме тишеп беркетәләр ҙә, аяҡтар менән алмашлап тибәләр.

**"Гөргөлдәк"** - ҡапаҡлағанда артта ҡалған кеше бағанаға йөҙө менән боролоп, "Гөр-гөр гөрләйем, унға тиклем һанайым да, эҙләйем", тип тора, ҡалғандар йәшенә. Кем беренсе табыла - шул гөрөлдәй.

**"Арҡан ишеү"** - быны ҡыҙҙар ғына уйнай. Сәсте майлап, уртаға ярып, алмашлап үрешәбеҙ һәм "Арҡан ишәм майлап, сәй эсерерһең баллап" -, тип һамаҡлайбыҙ. Кем матур үргән, шул еңә.

**"Үлсәү"** - ике кеше арҡа терәп тораһың да, ҡулдарҙы элмәкләйһең, алмаш-тилмәш күтәрешәһең. Кем ауыр, "лупыш" исеме бирелә.

**"Ат сабыштырыу"** - малайҙар киндербау (сабата бауы) менән бер-береһен йүгәнләп саба, алдан килгән еңеүсе.

**"Аҡтар-ҡыҙылдар"** - иң таралған уйын булды. Ике урында ҡыуыш эшләнә. Береһе - ҡыҙылдарҙыҡы, икенсеһе - аҡтарҙыҡы. Һәр малай ҡулында ап-аҡ ағас ҡылыс, ағастан "граната"лар яһалған, командирҙар һайланған. "Ур-ра" ҡысҡырып, алышалар, ҡыуышты ҡайһы яҡ баҫып ала, шулар еңеүсе. Күберәк "аҡтар" еңелә торғайны, ә беҙ, ҡыҙҙар, "яралы"ларҙы дауалай инек.

**"Күҙ теркәшеү"** - ике кеше ҡаршы-ҡаршы ултыраһың да текләшәһең, кем түҙмәй, күҙен сипылдата - еңелә, уйындан сыға.

**"Бармаҡ шартлатыу"** - түңәрәкләшеп торабыҙ, бейегән һымаҡ хәрәкәттәр яһап, бармаҡ шартлашабыҙ. Кем аҙаҡҡа тиклем шартлата, шул еңеүсе була.

**"Бында еләк күп икән"** - берәү үлгән бүре булып ята. Ҡалғандар: "Бында еләк күп икән, айыу-бүре юҡ икән" -, тип "еләк" йыя. Бер аҙҙан арыныҡ, тип, әлеге "бүре"гә ултырабыҙ. Теге һикереп тороп баҫтыра, тотолған кеше бүре булып ята.

**"Үли-үли (ҡыя баш, чижик)"** - ҡыя башлап киҫелгән бер сирек урта бармаҡтан йыуаныраҡ ағасты осора һуғалар. Сәпкә теймәһәң, дүрт аяҡлап "үли-үли" тип, тешләп килтерәһең.

Иң аҙаҡ **"Шымырыҡ"**ты уйнай инек. Түңәрәкләп ултыраһың да, шып-шым булаһың. Әммә оҙаҡ ултырып булмай, беребеҙ көлөп ебәрә, унан башҡаларыбыҙ шырҡылдай.

**Бына бит, күпме уйын булған! Уларҙың күбеһен бала-саға үҙе лә уйлап сығарған. Минеңсә, был уйындар баланы физик яҡтан сыныҡтырһа, үҙаллы фекерләү йәһәтен, үҙ-ара аралашыу, татыулыҡ, берҙәмлек тәрбиәһен дә биргән. СыныҒып үҫкәнгә ауырыуға ла, донъя ауырлыҡтарына ла бирешмәй, һәр мәсьәләне хәл итергә өйрәнгәндәр. Һәр быуындың бала саҡ уйындары халыҡ ижадының мөһим, гүзәл төрө, аҫыл ташы, халыҡ тарихы. Ул онотолорға ла, иҫкерергә лә тейеш түгел. Мин әле Һайыҫҡан урамындағы уйындарҙы ғына яҙҙым, ә һәр төбәктә, урамда улар күпме!? Башҡалар ҙа яҙһа ине, тигән теләктә ҡалам.**

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*

# БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

## Балаңа мираҫ итеп үлемһеҙлек бүләк ит

- Был һабаҡ, Кэтрин, барыһына ҡарағанда ла иң мөһиме. Уны үҙләштергәндән һуң һин Портер менән Саритаға, һәр кем яҙмышы үҙенән һуң бөйөк мираҫ ҡалдырыуҙы талап итә, тигән хәҡиҡәтте асырға тейешһең. Әгәр ҙә балаларың был яҙмыш саҡырыуын ҡабул итһә, ә мин беләм, был шулай буласаҡ, улар ҡәҙерле кешеләренең йөрәгендә мәңге һаҡланып, үлемһеҙлеккә эйә буласаҡ.

- Ә ҡапыл экранда килеп сыҡҡан "Яҙмыш картиналары" тигән һүҙҙәрҙе һин махсус рәүештә уйлап сығарҙыңмы?

- Юҡ, - тип яуап бирҙе Джулиан, - әммә улар минең фекеремде бик яҡшы итеп ҡеүәтләй. Аңлайһыңмы, һәр беребеҙҙең үҙенә күрә тормоштағы тәғәйенләнеше бар. Беҙҙең, ысынлап та, матур тормош ҡорғобоҙ килә. Вацлава Гавеланың һүҙҙәрен хәтереңә төшөр әле. "Кешенең ысын тормош һынауын үтеүе үҙе тарафынан һайланған роль уйнауҙа түгел, ә яҙмыш тарафынан тәғәйенләнгән ролде башҡарыуға ҡайтып ҡала".

- Нисек итеп миңә Портер менән Саритаға уларҙың тормоштағы тәғәйенләнешен аңларға ярҙам итергә һуң?

- Был ауыр түгел, - тип яуапланы Джулиан. - Уларға күңел төпкөлөнән сыҡҡан шым ғына шыбырҙауҙы тыңларға өйрәт.

- Аныҡыраҡ итеп аңлатһаңсы, - тип һораным мин.

- Күңел төпкөлөнән сыҡҡан шым ғына шыбырҙауға ҡолаҡ һалыу - ул, тимәк, йөрәк төпкөлөнән сыҡҡан саҡырыуҙы ишетеү. Был саҡырыуҙы ишетеү менән һин уға буйһонорға бурыслыһың. Ҡайһы саҡта был тауыш беҙ тәбиғәт менән аралашҡанда ишетелә. Мәҫәлән, сыуаҡ көҙ көндәренең береһендә урманда әҫәрләнеп йөрөгән саҡта был шыбырҙауҙы ишетә алабыҙ. А ҡайһы саҡта ул беҙгә һынау кисергән мәлдә, тормош мәғәнәһеҙ, өмөтһөҙ булып тойолғанда, килеп ҡағыла. Мәҫәлән, беҙҙең өсөн ҡәҙерле кеше был донъянан китеп барғанда йәки ниндәйҙер хыялыбыҙ емерелгәндә. Бар аҡыл һине яҙмыш һуҡмағы буйлап алып барасаҡ был эске тауышты үҙ мәлендә тотоп ҡалыуҙан ғибәрәт. Йөрәк кәңәшенә ҡолаҡ һал. Яҙмыш ҡушыуы буйынса йәшә. Шул саҡта һин үҙең тураһында бөйөк мираҫ ҡалдырасаҡһың.

- Белмәйем инде, быға балаларымды өйрәтә алырмынмы икән? Унан һуң, балаларым бигерәк бәләкәй бит әле, - тип икеләндем мин.

- Үҙең ҡара, Кэтрин. Эйе, балаларың бәләкәй әле. Шулай ҙа һин барыбер ҙа кешеләргә файҙа килтерә торған күңел тауышына ҡолаҡ һалыу кеүек был бөйөк ғилемде улар тап бөгөн үҙләштерә һәм баһалай аласаҡ, тигән ҡарарға килерһең. Уларға йөрәк менән аралашыу мәлдәренең мөһимлеген булһа ла аңлатырға тырыш. Балаларың ҙурайғас, ниндәй генә тормош юлы һайлаһа ла һин уларҙы яратасағыңа һәм хәстәрләйәсәгеңә ышаныстары булырға тейеш. Балаларыңа рухи эҙләнеү артабанғы үҫештәре өсөн кәрәкле буласағын аңлат. Уларҙы бөйөк әйберҙәр тураһында хыялланырға илһамландыр. Уларға был донъяға ҡулдан килгән тиклем үҙ өлөшөндө индергәндә генә ысын уңыш яуланыуын аңлат. Балаларың үҙҙәренә "Был донъяға мин файҙалы һәм ҡиммәтле булырҙай нимә эшләй алам?" - тигән һорау менән йышыраҡ мөрәжәғәт итһен. Һәм тағы ла улар үҙҙәренә: "Ҙур файҙа килтерә алырлыҡ итеп мин үҙ ваҡытымды һәм һәләттәремде нимәгә тотона алам?" - тигән һорау бирһен. Бер фәйләсүф әйтмешләй, кешенең төп бурысы тормош мәғәнәһенә әүерелгән идея табыуҙан ғибәрәт. Һәм ул хаҡлы. Бер генә кешене булһа ла бәхетле итә алырҙай идея табыу һәм был идеяһы өсөн үлемгә барырға әҙер булыу - ысын тормош мәғәнәһе ошонда ҡорола ла инде. Быларҙың барыһына ла төшөнгәс, Ғаләмдең бар көсө һиңә уңыш ҡаҙанырға ярҙам итәсәк.

**Робин ШАРМА.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Еңелеү әсе булмаясаҡ, әгәр уны йотмаһаң

Ваҡыт-ваҡыты менән һәр кемебеҙ еңелеү кисерә. Еңеү яулау еңел түгел, әгәр беҙ уңышһыҙлыҡтан ҡурҡабыҙ икән, тәүәккәлләргә лә ҡурҡасаҡбыҙ. Ә инде теге йәки был эштә үҙебеҙҙе һынап ҡарарға бер ваҡытта ла батырсылыҡ итмәйбеҙ икән, ваҡыт үтеү менән беҙ бер урында ҡатып ҡаласаҡбыҙ. Үҫеш һәр ваҡыт тәүәккәллеккә әҙер булыуҙы талап итә, хатта уңышһыҙлыҡ һәм еңелеүҙәр кисерергә тура килгәндә лә. Әгәр яңы ғына тәпәй баҫа башлаған бала кеүек, уңышһыҙлыҡтан ҡурҡһаҡ, бик аҙҙарыбыҙ ғына атларға һәм һөйләшергә өйрәнер ине! Атларға өйрәнер өсөн беҙгә ҡайһы саҡта ҡоларға, тубыҡты, эйәкте ауырттырырға әҙер булырға кәрәк. Уңыш яулау һәм еңеүсе булыр өсөн беҙ һәр ваҡыт уңышһыҙлыҡ буласағын да күҙ уңында тотоп, батырсылыҡ итергә әҙер булырға тейебеҙ. Шулай ҙа беҙгә "Уңышһыҙлыҡты һин үҙең еңелеү тип ҡабул итмәһәң, еңелеү булып һаналмай" тигән һабаҡты үҙләштерергә кәрәк.

Электр лампаһын уйлап тапҡан ваҡытта Томас Эдисон мең тапҡыр уңышһыҙлыҡ кисергән! Кемдер Эдисондан, был тиклем уңышһыҙлыҡтарҙан һуң уның күңеле төшөп, был эште ташлап ҡуйыу теләге тыумағанмы икән, тип һораған. Ул былай тип яуап биргән: "Был бары тик юлдағы аҙымдар ғына. Мин был эшкә тотонған һайын һабаҡ алдым, һәр хәлдә, мин электр лампаһын нисек эшләргә ярамай икәнлеген астым. Мин хатта үҙ хаталарымда булһа ла өйрәнеү теләге менән яндым".

Бүтәнсә итеп әйткәндә, Эдисон һәр ваҡыт уңышҡа өлгәшмәһә лә, еңелеүҙе таныуҙан ныҡышмалы рәүештә баш тартҡан. Ул күп тапҡыр еңелеүҙе татып ҡараған, әммә уны йотмаған. Еңелеүҙе йотоу, тимәк, уңышһыҙлыҡ кисереп, даланһыҙ кеше булыуыңа ышаныу ул. "Мин уңышһыҙлыҡ кисерҙем" һәм "Мин даланһыҙ кеше" тигән һүҙҙәр араһында ҙур айырма бар. Ниндәй ҙә булһа проект тейешенсә бармай икән, беҙ үҙебеҙгә: "Минең тырышыуҙарым барып сыҡманы", - тип әйтә алабыҙ. Ә инде еңелеүҙе ҡабул итеү - ул шулай уҡ "Мин уңышһыҙлыҡ кисерҙем, тимәк, мин даланһыҙ кеше" йәки "Мин быны яҡшы итеп эшләй алмағас, минең ҡулымдан бер нимә лә килмәй" - тип әйтеүгә тиң. Беҙ үҙебеҙҙе еңеү йә еңелеү һөҙөмтәһенә ҡарап баһалайбыҙ: әгәр беҙ нимәгәлер өлгәшәбеҙ икән, тимәк, беҙ үҙебеҙгә хөрмәт менән ҡарай алабыҙ, ә инде бер ни ҙә килеп сыҡмай икән, беҙ - даланһыҙ. Шулай итеп, еңелеүҙе ҡабул иткән ваҡыттан алып һөҙөмтәле эшләү һәләтебеҙ кәмей башлай. Һәр бөйөк лидер, һәр бөйөк спортсы, һәр бөйөк тикшеренеүсе, аҡыл эйәһе, уйлап табыусы, эшҡыуар хата ебәргән, уңышһыҙлыҡтар кисергән. Әммә улар барыһы ла бөйөк булып китә алған, сөнки улар үҙҙәрен был еңелеүҙәр өсөн ғәйепләмәгән, киреһенсә, яңылышыуҙарҙы һабаҡ итеп алып, һөҙөмтәләрен яҡшырта алған. Улар уңышһыҙлыҡ ваҡытлыса ғына күренеш булыуын белгән һәм уңыш яулар өсөн көрәшергә әҙерлек күрһәтеп, уңышһыҙлыҡ ҡайғыһына батып ултырыуҙан баш тартҡан.

Әгәр ҙә беҙ унан файҙалы һабаҡ алабыҙ икән, ҡайһы саҡта еңелеү ҙә беҙҙең менән булған иң яҡшы ваҡиға булырға мөмкин. Еңелеү әсе булыуы ихтимал, әммә, һуңғы сиктә, әсе тәм улай уҡ насар түгел, ни тиһәң дә, әсе тәмләткес һалынмаһа, беҙҙең ашаған аҙығыбыҙ ҙа улай уҡ тәмле булмаҫ ине. Ошоноң кеүек, әгәр беҙ әселе тәжрибәнән ҡурҡмайынса, унан фәһем һәм һабаҡ алһаҡ, ул беҙҙең тормошобоҙҙо иҫ киткес тәмләткес менән байытып ебәреүе лә мөмкин.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 1 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Агент национальной безопасности". Сериал
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "След". Сериал
19.10 "Жди меня"
20.00 "Жаркий лед", 93-я серия. Сериал
21.00 Время
21.30 "Братья Карамазовы", 3-я серия. Сериал
22.30 "Близнецы. Одна судьба". Док. фильм
23.40 "Познер"
00.40 Ночные новости
01.00 "Гении и злодеи"
01.30 "Молодежь на прогулке". Комедия
03.00 Новости
03.05 "Король футбола: кубок Европы". Комедия
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.55 "Своя чужая сестра". Мелодрама
10.50 "Вести. Дежурная часть"
11.00 "Вести"
11.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.45 "Инспектор Лосев". Детективный сериал (В перерыве - 14.00 "Вести")
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.50 "Вести. Дежурная часть"
18.00 "Однажды будет любовь", 86-я серия. Сериал
19.00 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Высший пилотаж", 9-я и 10-я серии
22.50 "Дежурный по стране"
23.50 "Вести+"
00.10 "Состояние сердца". Комедия
01.45 "Пленники Посейдона". Триллер
04.35 "Ха!"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "Сегодня утром"
09.00 "Квартирный вопрос"
10.00 "Сегодня"
10.25 "Чистосердечное признание"
11.00 "Следствие вели..."
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.35 "Возвращение Мухтара-2". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00 "Сегодня"
16.30 "Адвокат". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Город соблазнов", 9-я и 10-я серии
21.15 "Мент в законе". "Силовой вариант", 1-я серия
22.10 "Честный понедельник"
23.00 "Сегодня"
23.20 "Мужчины в большом городе", 1-я серия
00.15 "Школа злословия"
01.05 "Футбольная ночь"
01.40 "Убить пса". Триллер
03.25 "Блэйд"
